ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 декабрь (аҡъюлай) 2023

№47 (1089)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклě

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Халыҡтың... баһалауы мөһим" 5



Тормошон юлында... остаздарҙың етәкләүе лә мөһим 6



Күсмә халыҡтар донъяһы, йәки Бөйөк дала цивилизацияһы хаҡында 8-9



Мәлде туҡтатыр көс... рәссамдарҙа 11



**АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!**

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4-14 декабрҙәге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында 2024 йылдың тәүге яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡ менән 750 һум 84 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү генә яҙылып, уҡыуҙан туҡтамаған, фекерле, аңлы, ғәмле, вайымлы милләттәштәр иҫәбен ишәйтәйек!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәптә балаларҙың телефон менән файҙаланыуын тыйыу һәм хеҙмәт дәресе хаҡында законға төҙәтмә индереүҙәренә ҡарашығыҙ нисек?

***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернат директоры, Күмертау ҡалаһы:*** Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттарының мәғариф тураһындағы законға мәктәптә уҡыусыларҙың смартфондар ҡулланыуын тыйыу тураһында үҙгәрештәр ҡабул итеүенә ыңғай ҡараштамын. Минең уйымса, тәртип шулай булырға тейеш: уҡыусы дәрескә инә, телефонын тауышһыҙ режимға ҡуя ла уны кабинетта махсус тәғәйенләнгән урынға һалып тора, ә дәрес бөткәс, алып сығып китә. Тәнәфес ваҡытында телефонын ҡарап ала, ата-әсәһенән ашығыс шылтыратыу-фәлән була ҡалһа, улар менән һөйләшеп ала. Икенсе дәрескә ингәндә, телефондар менән тағы шул уҡ тәртип ҡабатлана. Әйткәндәй, яңы заман балалары смартфон-айфондарға ныҡ бәйле. Күпселек бала хатта дәрестә лә телефонынан айырыла алмай: кәрәкмәгән платформаларҙа ултыра, һәр төрлө блогерҙарҙың мәғәнәһеҙ видеоларын ҡарай йә уйын уйнай. Шул арҡала улар дәрестә уҡытыусының яңы тема аңлатҡанын ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә ҡала, бөтөн иғтибары - телефонында. Һөҙөмтәлә бала мәктәп программаһынан ҡалыша, өлгәшмәй, ябай ғына төшөнсәләрҙе белмәй, аҡыл яғы һайыға - шулай итеп, дөйөм үҫеш һәм белем кимәле тотҡарлана башлай. Улар бит барыбер бала өсөн уйынсыҡ, күңел асыу сараһы менән бәрәбәр. Телефоны менән ул буш ваҡытында, өйгә ҡайтҡас та ултыра ала, ә уҡыу йылдары, тыңламай ултырған дәрес һабаҡтары кире ҡайтмай һәм үҙләштерелмәй ҡала. Шуға күрә был закон бөгөнгө көн өсөн бик тә урынлы, тип иҫәпләйем. Әлбиттә, заман технологияһы тиҙ үҫешә, берәр ун-егерме йылдан алыштырғыһыҙ тойолған смартфон-айфондарҙың да ваҡыты үтер, уларҙың кәрәге лә ҡалмаç, шуға ла телефонға ҡапланып китеп, реаль ысынбарлыҡтан тороп ҡалыу, эргәндә, тирә-йүндә ни барғанын белмәй-күрмәй ултырыуҙың әҙемтәһе бик ҡыҙғаныс хәлгә әйләнеүе ихтимал.

Депутаттарҙың тағы бер мәсьәлә - мәктәптә хеҙмәт дәрестәрен тергеҙеү, хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙе ҡуҙғатыуы ла көнүҙәк, тип иҫәпләйем һәм был тәҡдим бөтөн мәктәптәрҙә лә хуплап ҡабул ителгәндер, тип уйлайым. Беҙ хеҙмәт дәрестәрендә балаларҙы ағас ултыртыу, мәктәп биләмәһен таҙартыу, ҡар көрәү, түтәл эшләү, сәскәләр ултыртыу кеүек эштәргә йәлеп итә башланыҡ. Малайҙарҙың хеҙмәт дәрестәрендә һәр төрлө эш ҡоралдары, инструменттар менән эш итеүенә, ҡыҙҙарҙың иһә тәмле итеп бешереренергә, тегергә өйрәнеүенә бер кем дә, шулай уҡ ата-әсәләр ҙә риза һәм бер ваҡытта ла ҡаршы булманылар ҙа. Барыһы ла аңлай: бөгөнгө малайҙар улар киләсәктә донъя күтәрер ир-егет, ә ҡыҙ балалар - буласаҡ әсәйҙәр, өйгә ҡот һәм йәм бирәсәк хужабикәләр. Бала сактан тәрбиәләнгән хеҙмәткә һөйөү, дәрестә алған хеҙмәт күнекмәләре балаларҙың киләсәкке тормоштарында бик тә кәрәк буласаҡ.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ БУЛАСАҠ!

**2024 йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип иғлан ителде. Президент Владимир Путиндың тейешле указы 22 ноябрҙә рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған.**

Ҡарар ғаиләне яҡлау һәм традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен популярлаштырыу маҡсатында ҡабул ителде, тиелә документта. Хөкүмәткә 27 декабргә тиклем Ғаилә йылын үткәреү буйынса ойоштороу комитетын төҙөү, уның составын раҫлау бурысы йөкмәтелгән. Тематик йылды ойоштороу өсөн яуаплы комитет рәйесе итеп Рәсәй хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикова тәғәйенләнгән.

Әйткәндәй, Башҡортостандың 11 ғаиләһе Федераль наградалар - "Ата-әсә даны" ордены миҙалы һәм "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләнде. Улар араһында Өфөнән Дилара һәм Вадим Асаиновтар - 4 балаға атай-әсәй. Дилара федераль һалым хеҙмәте белгесе булып эшләй, уның тормош иптәше - хәрби пенсионер, хәрби хәрәкәттәр ветераны, Рәсәй Оборона министрлығының наградалары менән бүләкләнгән. Ғаилә сәләмәт һәм әүҙем тормош алып бара.



# ТОРАТАУҒА, ҠЫШ БАБАЙҒА!

**"Торатау" геопаркында Ҡыш бабай резиденцияһын асырға әҙерләнәләр. Ул үҙ эшен 14 декабрҙә башлай һәм ҡунаҡтарҙы 2024 йылдың 7 ғинуарына тиклем ҡабул итә.**

Ауылға барыу өсөн 8 (987) 254-20-24 телефоны буйынса алдан яҙылырға кәрәк. 8 декабрҙән шылтырата башларға мөмкин. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Ҡыш бабайҙың Өфөләге резиденцияһы 24 декабрҙә асыла. Быйыл ул "Азимут" ҡунаҡханаһы алдындағы скверҙа урынлаша.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Уҡыусылар араһында телефонды "шпаргалка" сифатында ҡулланыусылар ҙа бар, әлбиттә, улар кәрәкле материалды шунан күсерәләр. Был инде башында булмағандарҙың ҡылығы, улар быны менән үҙҙәренә зыян ғына килтерә.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

# БАЛАҢА ВАҠЫТ БҮЛ!

**Беҙҙең Өфө районы Шамонино ауылындағы "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы - башҡорт балалар баҡсаһы, шуға барлыҡ уҡытыу-тәрбиә эштәрен башҡортса алып барырға, тәрбиәләнеүселәребеҙҙә үҙ туған теленә һөйөү орлоҡтары һалырға, тип тырышабыҙ.**

Әммә, ҡыҙғаныска күрә, ҡайһы бер әүҙәр ғаиләләрендә туған телдә аралашмай. Ата-әсәләр үҙҙәре лә телдә камил белмәй. Минең үҙемә лә, ғүмер буйы Ырымбур өлкәһендә урыҫтар араһында йәшәгән кешегә, туған телдә аралашыу ауыр бирелде. Шулай ҙа баланы туған мөхитенән айырмаһын ине атай-әсәйҙәр. Бала аңламай, тип, уның менән руссаға күсеп китмәҫкә кәрәк, сөнки бәләкәйҙән ниндәй тел һәм мәҙәни мөхиттә үҫеүенә ҡарап, кешенең шәхесе формалаша.

Шулай уҡ балаға күберәк иғтибар бүлергә, уның менән бергә ваҡыт уҙғарырға тырышырға кәрәк. Әлбиттә, Өфөгә йөрөп эшләгән атай-әсәйҙәр арып ҡайтып, балаларына ваҡыттары етмәүе лә ихтимал, тип аҡланабыҙ ҙа ул. Ләкин телефонда ултырырға нисектер ваҡыттары ла, хәлдәре лә етә бит. Йәш ата-әсәләрҙең донъяға ҡараштары ла башҡа, заман да үҙгәрҙе, ҡайһы бер әүҙәр балаһы менән аралашыуҙы ауыр эш кеүек ҡабул итә башланы. Үҙенә лә ваҡыт бүлә белеү мөһим, шулай ҙа баланы ла бергә алып йөрөргә кәрәк. Театрға бергә барып килергә, ял минуттарында бергә ултырып китап уҡырға, ҡыҙыҡлы уйын уйнарға, спорт менән шөғөлләнергә була. Шул осраҡта балалар ҙа һеҙҙе яҡын күрер, яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа ла өйрәнер.

Бер нисә йыл элек, мин әле магистратурала психолог һөнәренә белем алғанда, балалар араһында тикшеренеүҙәр үткәргәйнем. Ғаилә портретын төшөрөргә ҡуштыҡ. Был психологик алымдарҙың береһе, һәр бала үҙ ғаиләһен һүрәткә төшөрә һәм психологтар шул рәсемгә ҡарап, уның күңелендәге аңларға тырыша. Тәү сиратта бала ниндәй төҫтәргә буяҡтар ҡулланыуына иғтибар бүленә: сағыумы, әллә ҡара төҫмө? Быйна нимә аптыратты мине был тикшеренеү барышында: тәү ҡарамаҡҡа бик матур, тулы ғаиләлә үҫкән ҡайһы бер балаларҙың һүрәтендә атай-әсәй өйҙә юҡ, кемеһелер ҡара буяуҙар ҡулланып, ниндәйҙер ҡурҡыныс заттарҙы төшөрә. Былдай һүрәттәрҙе кемдең ата-әсәһе һәр ваҡыт эштә, йәки телефонда социаль селтәрҙәрҙә ултыра - шул балалар төшөрә.

Бала өсөн бар донъя - ул атай-әсәй. Һеҙ уларға бик кәрәк. Балаларҙы яҡшылыҡҡа әйҙәп, тыуған мөхитендә, матур тәрбиә биреп, мәҙәниәтебеҙгә ылыҡтырып үҫтерәйек. Бәхетле һәм яҡты бала саҡ хәтирәләре ҡалһын уларҙа, тормошта үҙҙәрен ышанысылы тотһондар, яҡшы эштәр атҡарып, тирә-яҡтағыларға ҡарата үҙҙәре лә матур мөғәмәлә иткән, рухлы кешеләр булып үҫһендәр.

**Эльвира МОСТАЕВА,**
**Өфө районы Шамонино ауылының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы мөдире.**

БЫЛ АЙҘА

# БИЛДӘҺЕҘ ҺАЛДАТ...

## тарихта ҡалһын



**Быйна шулай итеп, йылға нөктә ҡуйыусы ҡыш башлығы Аҡъюлай "ағабыҙ" - декабргә лә аяҡ баҫтыҡ. Улай тиһәң дә, был айҙы ла ҡара ерҙә ҡаршыларға тура килгәне бар, бер нәмәгә аптырарға түгел бөгөн. Хәҙер беҙ нисәмә йылдар инде ғәҙәти булмаған һауа шарттарында йәшәйбеҙ һәм уға яраҡлашырға тырышабыҙ. Шуға күрә декабрҙең нисек килере беҙҙе әллә ни борсомай ҙа кеүек.**

Дөрөҫ, гидрометеорология фәне менән уртаҡлығы булмаған ҡайһы бер шарлатан сайттар, һәр ваҡыттағыса, әҙәм ышанмаҫтай фараздары менән яу һала: ҡаты һалҡындар килә, бөтөн донъяны ҡар баҫа, имеш... Һауа торошон фән һәм алдынғы технологиялар ярҙамында нигеҙләүсе Гидрометүҙәк синоптиктарына ла ҡолаҡ һалырға кәрәктер: улар раҫлауынса, декабрҙә лә ҡар әллә ни мул булмаяҫаҡ, һауа температураһы урыны менән минус 5 - 20 градус тәшкил итәсәк. Һәр кемебеҙгә мәғлүм ки, парник газдары тупланышы арта барған һайын, был туранан-тура һауа торошоноң йылына барыуына килтерә. Бөтөн донъя климат йүнәлеше шундай.

Йылылыҡ, әлбиттә, ҡыш осорона йәҙ түгел, беҙҙең күңелдәргә кәрәк ул бөгөн: донъя хәлдәре ҡасан йылынып икән һуң, быйна шуны зарығып көтә әҙәм балаһы, ә бөтәһенән дә бигерәк улдарын һуғышҡа оҙатҡан әсәләр көтә именлек, яу яландарынан күңелдәрҙе иретерлек изге хәбәрҙәр килеүен... Үкенескә, 1941-1945 йылдарҙа билдәһеҙ гәйеп булған улдарын, ирҙәрен көтөп-көтөп тә көтөп ала алмаған әсәләр һәм ҡатындар ҡәҙерлеләрен үҙҙәре был донъянан киткәнсә көттөләр. Ошо һуғышта билдәһеҙ юғалған совет һалдаттары һаныuna унан һуңғы хәрби конфликттарҙа гәйеп булғандарҙы ла ҡушһаң, 2,5 миллионлап кеше килеп сыға. Шул һанға әсир төшкән яугирҙарҙы ла бергә иҫәпләп, статистика 4,5 млн самаһы һанды атай. Был хаҡта һүҙ башлауҙың сәбәбе: декабрҙең өсөнсө календарь бите - Рәсәйҙең иҫтәлекле датаһы - Билдәһеҙ һалдат көнө **(3)**. Был хәтер көнөн булдырыу 1966 йылдың 3 декабрендәге ваҡиға менән бәйле. Һәр хәлдә, был көн минең, ул саҡта 13 йәшлек кенә баланың, әрнеү ҡатыш тулҡынландырғыс бер ғәҙәттән тыш хәл булып, мәңгелеккә хәтеремдә тороп ҡалды. Мәскәү янында немец фашистарын ҡыйратыуҙың 25 йыллығы айҡанлы, баш ҡаланан 41 км алыҫлыҡта ятҡан туғандар ҡәберлегенән билдәһеҙ бер һалдаттың ҡәбер тупрағы тантаналы шарттарҙа Мәскәүҙең Кремль стенаһы янына күсереп ерләнде. Был ваҡиғаны 1966 йылдың 3 декабрендә бөтөн киң мәғлүмәт саралары яҡтыртты. Яугирҙың һаҡланып ҡалған гимнастерка киҫәктәренән уның рядовой булғанын асыҡлайҙар, ләкин бер ниндәй ҙә документтары табылмай. Ул тәүҙә

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# ?

***Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәптә балаларҙың телефон менән файҙаланыуын тыйыу һәм хеҙмәт дәресе хаҡында законға төҙәтмә индереүҙәренә ҡарашығыҙ ниндәй?***

***Айгүзәл ИСКӘНДӘРОВА, Өфө ҡалаһы 30-сы дөйөм белем биреү мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы:*** Бөгөнгө үҫмер егет һәм ҡыҙҙарҙы смартфонһыҙ күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын, сөнки ул - уның айырым бер ҙур донъяһы; уның аша йәштәр тормошто танып белә, ундағы ваҡиғаларҙа ҡатнашып китә, үҙенең ҡараштарын, мөнәсәбәтен белдерә , "Тик-ток" йә булмаһа фильмдар ҡарай, мауыҡтырғыс уйындарҙан айырыла алмай - ҡыҫҡаһы, телефоны "эсендә " йәшәй.

Яҡшымы был, насармы? Дөрөҫөн әйткәндә, яҡшыһы ла, насары ла бар, шуға күрә башҡоллай гаджет ҡолона әүерелеү ҙә кәрәк түгелдер. Бер яҡтан, уның төп функцияһы, нигеҙҙә, яҡындарың, дуҫтарың йәки башҡа кәрәкле абоненттар менән бәйләнеш тотоу, ләкин шул уҡ ваҡытта электрон-техник үҫеш ҡаҙанышының ошондай бер мөгжизәһенең башҡа мөмкинлектәрен дә көнө-төнө тигәндәй файҙаланабыҙ һәм, әсәйем әйткәнсә, "айырылмаҫ дуҫтарбыҙ". Беҙ хәҙер телефонһыҙ бер генә сәғәт түгел, минут та тора алмайбыҙ һәм күҙ алдына килтерәһегеҙмә: депутаттар беҙҙе ошо дуҫыбыҙҙан айырырға итә. Ярай ҙа дәрес бөткәнсә генә тыйып торһалар, тик быйның менән дә бит килешеүе ҡыйын, сөнки телефон уҡыусыға дәрес ваҡытында ла кәрәк булыуы бар. Ни тиһәң дә, ул бит шулай уҡ белем сығанағы. Мәҫәлән, беҙ уны дәрес ваҡытында үтелгән темаға бәйле белешмә рәүешендә йыш файҙаланабыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәр, терминдарҙы ҡарап алыу, орфографик йә аңлатмалы һүҙлектән файҙаланыу тиһеңме - ҡыҫҡаһы, телефон беҙгә бик кәрәк.

Юғары иҡтисад мәктәбе университеты ғалимдары раҫлауынса, гаджеттар уҡыусыларҙың белем алыу, өлгәшеү барышына ыңғай йоғонто яһай, әгәр дәрес ваҡытында балалар телефондарҙы белем алыу маҡсатында ғына файҙаланһа. Депутаттар, бәлки, балаларҙы дәрестә телефон менән уйнап ултыра, тип ҡурҡалаrҙыр? Ә минең, телевизорҙан яңылыҡтар ҡарағанда, ул депутаттарҙың да күбеһенең телефондары менән мауығып ултырғанын күргәнем бар. Бәлки, уларҙың үҙҙәренә лә ултырыш ваҡытында телефон менән файҙаланыуҙы тыйырға кәрәктер? Дөрөҫ, уҡыусылар араһында телефонды "шпаргалка" сифатында ҡулланыусылар ҙа бар, әлбиттә, улар кәрәкле материалды шунан күсерәләр. Был инде башында булмағандарҙың ҡылығы, улар быйның менән үҙҙәренә зыян ғына килтерә, минеңсә. Бәләкәй класс балалары ла дәрестә телефонды күбеһенсә уйынсыҡ рәүешендә файҙаланып ултыра. Уларҙы тыйырға була, ә быйна телефонды кәрәкле осраҡта ғына файҙаланыу тейешлеген аңлаған өлкән класс уҡыусыларына был закон ҡағылмаҫҡа тейештер, бәлки? Ни тиһәң дә, беҙ бит БДИ-ға әҙерләнәбеҙ.

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 224 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 239 пациент, шул иҫәптән 117 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 2871 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 1079-ы - 60 йәште үткән.

✓Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәрендә Луганск Халыҡ Республикаһында эшләгән табиптарға рәхмәт белдерҙе. "Минең өсөн ошо һөнәр эйәләре - ысын геройҙар. Ә Донбасста эшләүселәр - икеләтә герой. Башҡортостан табиптары Красный Луч ҡалаһында өлкән һәм кескәй пациенттарҙы дауалауын дауам итә. Өйҙән алыҫта, ҡатмарлы шарттарҙа. Был бригадала - 26 табип. Уларҙың күбеһе беренсе тапҡыр ғына командировкала түгел", - тип яҙа Башҡортостан Башлығы.

✓Донбасс малайы Башҡортостан Башлығының исемле сәғәте менән бүләкләнде. Радий Хәбиров махсус хәрби операция зонаһына командировкаға барғанда Кирилл исемле малай менән танышҡан. Ошо турала видеоҙма республика етәксеһенең телеграм каналына һалынған. "Үҙем дә улдар үҫтерәм, шуға һуғыш барған урында малайҙарҙы күреү күңелемә бик ҡыйын. Донбасс ерено тиҙерәк тыныслыҡ килһен ине. Ә Кирилға республика Башлығынан сәғәт бүләк иттем. Ул ҡәнәғәт йөҙ менән өйөнә йүгерҙе", - тип уртаҡлашты Радий Хәбиров.

✓Башҡорт балы Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып "хәләл" сертификатын алды. Хәҙер уны ошо стандартты таныған бөтә илдәрҙә лә һатырға мөмкин. Башҡортостан - илебеҙҙә Рәсәй сифат системаһының яңы стандарттары буйынса балға "Хәләл" сертификатын алған тәүге төбәк. VII "Беҙҙең бренд" махсуслашҡан күргәҙмә барышында үткән тығнәрәк ҡорҙа "Алтын Солоҡ" учреждениеһына ошондай сертификат тапшырылды.

✓Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа 2024 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән граждандарҙың пенсияһын индексациялау тураһында закон ҡабул итте. Рәсәйҙә пенсия 7,5 процентҡа арттырыла. Был 32 миллион кешегә ҡағыла, тип хәбәр итә Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте рәйес Вячеслав Володинға һылтанма менән.

✔ *Белгестәр әйтеүенсә, бер аҙнанан ашыу дауам иткән йүтәл ауырыуҙың тәүге билдәһе булып тора. Был осраҡта табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ауырыу лаборатор тикшереү ваҡытында ғына раҫлана.*



ерләнгән туғандар ҡәберлеге 1941 йылдың ноябрь-декабре Мәскәү өсөн немец фашистары менән барған аяуһыҙ һуғыш урынында барлыҡҡа килгән була. Тыуған ил өсөн йәнен фиҙа ҡылған ошо рядовой һалдат һәм ошонда һуңғы төйәген тапҡан башҡа исемһеҙ яугирҙар, баш ҡаланы һаҡлауҙа ҡатнашҡан ҡала граждандары - ополченецтар хәтерен мәңгеләштереү маҡсатында эшләнә был. Шулай итеп, Мәскәү йөрәге - Кремль стенаһы янында Билдәһеҙ һалдат мемориалы барлыҡҡа килә һәм унда Мәңгелек ут тоҡандырыла. Шунан бирле был изге урын Бөйөк Ватан һуғышында ғына түгел, ә унан һуңғы хәрби хәрәкәттәрҙә ғәйеп булған яңы Рәсәй яугирҙары иҫтәлеген хөрмәтләү урынына ла әйләнде.

Билдәһеҙ һалдаттар... Бөгөнгө быуын әсәләр һәм кәләштәрҙең әсе яҙмышына ла төштө хәбәрһеҙ юғалған һөйөклөләрен көтөп, көткәккә әйләнеү ҡайғыһы. Улар Оборона министрлығынан башлап, яҡындары хеҙмәт иткән часть командирҙарына, бергә хеҙмәт иткән иптәштәренә мөрәжәғәт итә, моргтарға ДНК анализдарын ебәрә... МХО барышында хәбәрһеҙ юғалғандарҙы эҙләүҙә Мәскәү ирекмәндәре, "Сармат" эҙләү-ҡотҡарыу отряды һәм башҡа ирекмәндәр ҙә ярҙам итә кешеләргә. Мәскәү эҙәрмәндәре йәйге осорҙоң өс айында ғына ла хәбәрһеҙ юғалғандарҙың туғандарынан ике мең ярымдан ашыу заявка ала. Ирекмәндәр Ростов моргы менән берлектә хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенән 180 кешенең исем-шәрифен асыҡлауға өлгәшә, ә иң ҡыуаныслыһы: шуларҙың 23-өһөнөң иҫән булыуы хаҡында хәбәр итә. Башҡаларының мәйете яҡындары ҡулына тапшырыла. Ә эҙләү юллап ирекмән-эҙәрмәндәргә, Бәйләнештәге махсус эҙләү төркөмөнә мөрәжәғәт итеп ялбарыусылар һаны бик күп. Һуғыш - ҡасан да һуғыш булып ҡала, тик шулай ҙа тиҙерәк имenlek урынлашып, әсәләрҙең ғәзиз улдары "билдәһеҙ"ҙәр исемлеген арттырмаһын, "Билдәһеҙ һалдат"тар элекке тарихта тороп ҡалһын, ә бөгөнгө яугирҙар тыуған йорттарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтһындар ине.

"Известия" гәзите сайты ошо йылдың апрелендә яҙып сығыуынса, Рәсәй Дәүләт Думаһы хәбәрһеҙ юғалған МХО-ла ҡатнашыусыларҙы үлгән тип таныу процедураһын ябайлаштырҙы. Был сара, депутат Павел Крашенинников әйтеүенсә, "Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең туғандарына социаль һәм страховка түләүҙәрен, махсус ярҙам сараларын алыу өсөн документтар туплауҙы тиҙләтеүгә булышлыҡ итәсәк." Был юғалтыу ҡайғыһын һис кенә баҫа алмаһа ла, ил етәкселегенең хәрби ҡорбандар ғаиләләре хаҡында мөмкин булған хәстәрлек өлгөһө.

Ғөмүмән, был ай хәрби тематикаға бай ғына. Мәҫәлән, **17 декабрь** - РФ Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре көнө (РВСН). Был мөһим хәрби подразделение Рәсәйҙең стратегик ядро потенциалының мөһим ҡеүәттәренең береһе һәм ул ситтән ихтимал булған агрессияны "ауыҙлыҡлап" тороусы үҙәк буйһоноуҙағы үҙаллы ғәскәр төрө. Уның составына ракета дивизиялары, полктары, әҙерлек һәм уҡытыу үҙәктәре, техник частар инә. Улар араһында Минск, Ырымбур, Һарытау ракета формированиелары иң көслөләре иҫәбендә. Яңыраҡ, 16 ноябрҙә, РФ Оборона министрлығы Рәсәйҙең үҙәк телетапшырыуында Ырымбур өлкәһендәге Ясный ракета соединениеһын стационар нигеҙҙәге "Авангард" комплексы менән өр-яңынан ҡоралландырыу барышын күрһәтте. Континентара баллистик ракета гидравлик механизм ярҙамында шахталағы тоҡандырыу ҡулайламаһына төшөрөлә. Алдынғы ҡоралланыу төрө булараҡ, "Авангард" системаһын 2018 йылда уҡ әле В.В.Путин "Еңелеү белмәҫ" тип атаны һәм уны "метеорит", "утлы шар" менән сағыштырғайны. Һәм, ысынлап та, был ракета сәпкә барған юлында киҫкен маневрҙарға һәләтле һәм ул һауа һөжүме, ракетаға ҡаршы телһә ниндәй оборонаға ла бирешмәй. Был иһә үҙ сиратында Рәсәйҙең стратегик ядро көстәренең хәрби мөмкинлектәрен тағы ла ҡеүәтләрәк итә.

Был айҙа тағы ла Бөтөн Рәсәй хоккей, СПИД менән Бөтөн донъя көрәш көндәре **(1)**, Банк хеҙмәткәрҙәре **(2)**, Рәсәйҙә иҫтәлекле көн, Билдәһеҙ һалдат көнө; Юрист, Халыҡ-ара инвалидтар, Бөтөн донъя компьютер графикаһы **(3)**, Информатика, Бөтөн донъя ҡосаҡлашыу **(4)** көндәре, Мәскәү янындағы һуғышта совет ғәскәрҙәре контрһөжүмгә күсә **(1941 йыл, 5 декабрь)**, Иҡтисад һәм социаль үсеш хаҡына халыҡ-ара ирекмәнлек көнө **(5)**, Халыҡ-ара граждандар авиацияһы **(7)**, Халыҡ-ара рәссамдар **(8)**, Коррупцияға ҡаршы халыҡ-ара көрәш **(9)**, Кеше хоҡуҡтары, Футбол көндәре **(10)**, Халыҡ-ара тауҙар көнө **(11)**, РФ Конституцияһы көнө **(1993)**, Башҡорт теле көнө **(14)**, Халыҡ-ара сәй **(15)**, РФ Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре көнө **(17)**, ЗАГС хеҙмәткәрҙәре **(18)**, Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам **(19)**, РФ Хәүефһеҙлек органдары хеҙмәткәрҙәре, Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көндәре **(20)**, Энергетика **(22)**, РФ Хәрби-һауа көстәренең алыҫ авиация көнө **(23)**, БР Конституцияһы көнө **(1993)**, "Ағиҙел" художество кәсепселек предприятиеһы ойошторолоуға - 60 йыл **(1963)**, Раштыуа **(25)**, РФ Ҡотҡарыусылар **(27)**, Халыҡ-ара кино **(28)**, көндәре, Өфөлә Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты асылыуға - 80 йыл **(25, 1943)**.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**7 -** прозаик, БР һәм РФ Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Әбү Насир Фараби исемендәге халыҡ-ара һәм В.Катаев премиялары, Рәсәйҙең Ҙур әҙәбиәт премияһы лауреаты **Флүр Ғәлимовҡа - 65 йәш** (1958).

**11 -** спортсы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, БР шашка федерацияһы рәйесе, Халыҡ-ара шашкалар федерацияһы президенты, халыҡ-ара гроссмейстер, С.Юлаев һәм Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры **Тамара Танһыҡҡужинаға - 45 йәш** (1978).

**12 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, йәмәғәт эшмәкәре, публицист,әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор,С.Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты, ордендар кавалеры **Рауил Бикбаевтың тыуыуына - 85 йыл** (1938-2019).

**15 -** шағир, фольклорсы, драматург, башҡорт әҙәбиәте классигы, БАССР-ҙың халыҡ сәсәне **Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына - 135 йыл** (1888-1966).

- СССР-ҙың халыҡ артисы, 1934-1977 йылдарҙа Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры, С.Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты, Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл байраҡ ордендары кавалеры **Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуыуына - 115 йыл** (1908-1977).

**24 -** йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, СССР халыҡтарының фольклор йырҙары конкурсы лауреаты, башҡорт эстрадаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Мәғфирә Ғәлиеваның тыуыуына - 95 йыл** (1928-2016).

**26 -** педагог, партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1955- 1971 йылдарҙа БАССР мәғариф министры **Фатима Мостафинаның тыуыуына - 110 йыл** (1913-1998).

**29 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы, Башҡортостанда Ваҡытлы революцион совет ойоштороусыларҙың береһе, 1935-1937 йылдарҙа БАССР мәғариф халыҡ комиссары **Ғөбәй Дәүләтшиндың тыуыуына - 130 йыл** (1893-1938).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәптә балаларҙың телефон менән файҙаланыуын тыйыу һәм хеҙмәт дәресе хаҡында законға төҙәтмә индереүҙәренә ҡарашығыҙ ниндәй?

***Гүзәл МИРХӘЙҘӘРОВА, ике уҡыусы бала әсәһе:*** Мәктәптә балаларҙың телефон менән файҙаланыуын тыйырға ҡарар сығарып, депутаттар дөрөҫ эшләй, тип уйлайым. Әлбиттә, һуңлабыраҡ ҡуйыла был мәсьәлә көн тәртибенә. Балаларҙы хәҙер телефондарынан айырып алыуы - айһай... Ләкин мәктәптең уҡытыусылар коллективы был талапты үтәүгә берҙәм тотоноп, тейешле тәртип булдырыуға өлгәшә алырҙар, тип уйлайым. Тик был осраҡта балалар менән ипле һөйләшеп, уларға аңлата алыу кәрәк. Ә инде бойороу тоны менән, әрләшеп- яманлашып, "ҡул ҡайырыуҙар" ысулы кәрәкмәй. Телефонды мәктәпкә алып килһендәр ул, тик дәрескә ингәндә уларҙы ҡалдырып торорға ышаныслы берәй урын, шкафмы шунда - кәрәк буласаҡ: бер бала ла үҙенең гаджеты юғалыуҙан борсолоп ултырмаһын. Бының өсөн мин шулай тәҡдим итер инем: өйҙә балаларға телефондарын һалып йөрөтөргә бәләкәй генә мукса, йәғни чехол тегеп йә һатып алып, шунда исемфамилияһын яҙырға була. Дәрес бөткәс, һәр кем үҙ әйберен ана шул муксаһынан танып аласаҡ, буталыуҙар булмаясаҡ. Ата-әсәләре менән балаларға тәнәфестә һөйләшеп алыу рөхсәт ителергә тейеш, тип уйлайым, шуға күрә уларҙың телефондарын иртәнән алып дәрестәр бөткәнсегә тиклем тартып алыу ярамай. Мәктәп был мәсьәләне юлға һалып алһа, өйҙә лә, бәлки, шул тәртипкә күнер ине балалар, юғиһә бит, тап ана шул телефон арҡаһында тауыш сыға, гел генә ҡарап тормаһаң, улар дәрес әҙерләүҙе лә, ашауҙы ла, йоҡоһон да онота.

Хеҙмәт дәрестәре хаҡында ла һүҙ бара икән. Улай тиһәң, минең белеүемсә, ул дәрес хәҙер технология тип йөрөтөлә һәм мәктәптәрҙә алып барыла, тик минә был дәрестәрҙең енескә бүленеп, малайҙар һәм ҡыҙҙар өсөн айырып алып барылыуы оҡшап етмәй. Хеҙмәт дәресен әлегеләй сыйырсыҡ ояһы эшләү, ҡар көрәү (малайҙар өсөн) һәм аш-һыу төрҙәре (ҡыҙҙар) әҙерләүгә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Заманса хеҙмәт дәресе балаға киләсәктә һөнәр һайлауға йүнәлеш бирергә йә булмаһа тормош көтә башлағас кәрәк буласаҡ донъяуи күнекмәләргә өйрәтергә тейеш, тип уйлайым. Мәҫәлән, интернеттан уҡып белеүемсә, Австралияла уҡыусы ҡыҙҙарҙы, малайҙар менән бергә, автомобиль йүнәтергә, тәғәрмәсен алмаштырырға, май кимәлен үлсәргә һ.б. шундай күнекмәләргә өйрәтәләр икән. Унан һуң тағы бер тәҡдимем бар: һөнәр һайлау йүнәлешендә һәр төрлө компания-предприятиелар менән килешеп, балаларҙы экскурсияға йөрөтөү, ундағы эш барышында мөмкинлек сиктәрендә практика үтеү, компания эшсәндәренә ярҙам итеү кеүек тәртиптә лә алып барылырға тейештер, тип күрәм бөгөнгө хеҙмәт тәрбиәһен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы республикала быума йүтәл менән ауырыу осраҡтарының артыуын билдәләй. Быйыл 10 айҙа 324 кеше сирләне, уларҙың 317-һе - балалар, тип хәбәр итә күҙәтеү ведомствоһының матбуғат хеҙмәте. Белгестәр әйтеүенсә, бер аҙнанан ашыу дауам иткән йүтәл ауырыуҙың тәүге билдәһе булып тора. Был осраҡта табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ауырыу лаборатор тикшереү ваҡытында ғына раҫлана. Республикала киҫкен респиратор инфекциялар менән сирләү осраҡтары ла күбәйә бара. Бер аҙнала сирле уҡыусылар 60 процентҡа артҡан.

✔Ковид-сирлеләрҙең артыуына ҡарамаҫтан, Рәсәй уҡыусыларын дистанҡа күсерергә йыйынмайҙар. Был хаҡта журналистарға Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов хәбәр итте. "Мәктәптәрҙә ябыу йәки балаларҙы өйҙән уҡыуға күсереү планлаштырылмай. Ауырыу таралған урындарҙа тейешле саралар күрелә, әлбиттә. Төбәктең мәғариф идаралығы ҡарары менән битлек режимы индерелергә мөмкин. Беҙҙә барлыҡ мәктәптәр эшләй, белем биреү процесы бара, яңы йылға әҙерләнәбеҙ", - тип белдерҙе Кравцов.

✔Ғаилә институтын нығытыуҙа һәм балалар тәрбиәләүҙәге хеҙмәттәре өсөн яҡташтарыбыҙ федераль наградаларға лайыҡ булды, тип хәбәр итә "Башинформ". Рәсәй Президентының тейешле указы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Вера Ивановаға "Герой-әсә" исеме бирелде, тиелә документта, Регина һәм Рөстәм Дәүләтовтар, Анна һәм Сергей Пантелеевтар, Рәзилә һәм Закир Хәмитовтар "Ата-әсә даны" ордены миҙалы менән бүләкләнде.

✔Башҡортостандан Эмиль Сәлимгәрәев терәк-хәрәкәт аппараты сирҙәренән яфаланғандарҙың йөҙөү буйынса Рәсәй беренселегендә алты тапҡыр чемпион исемен яуланы. Йөҙөү буйынса ярыштар Раменское ҡалаһында үтте. Унда Рәсәйҙең 42 төбәгенән 370-тән ашыу спортсы ҡатнашты. Рәсәйҙең йыйылма командаһы ағзаһы Эмиль Сәлимгәрәев алты алтын миҙал яуланы һәм ирекле стиль менән 50 метрға, 100 метрға һәм 400 метрға, шулай уҡ баттерфляй менән 100 метрға, арҡаға ятып 100 метрға һәм 200 метрға комплекслы йөҙөүҙә мульти-миҙалсылар араһында беренсе булды.

ҠЫҪҠАСА

# ЯУГИРҘАРЫБЫҘ ЯНЫНА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика яугирҙары хеҙмәт иткән махсус хәрби операция зонаһына барҙы.** Ул үҙенең телеграм-каналында "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы менән осрашыуы, хәрбиҙәрҙең көнкүреше менән танышыуын хәбәр итте. "Шуныһы мөһим: махсус хәрби операция зонаһындағы егеттәребеҙҙе кәрәк-ярақтар менән тәьмин итеүҙе яйға һалдыҡ. Республиканан даими рәүештә гуманитар ярҙам ебәреп торабыҙ, беҙҙең егеттәр бер нәмәгә лә мохтаж түгел, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Уларға туғандарынан һәм яҡындарынан сәләм, йылы һүҙҙәр еткерҙем. Яугирҙарыбыҙҙың һәр береһе менән ғорурланабыҙ". Радий Хәбиров әйтеүенсә, уның башҡорт яугирҙары менән осрашыуҙары дауам итәсәк. Республика хәрбиҙәр, шулай уҡ уларҙың ғаиләләре хаҡында хәстәрлек күрер, тип ышандырҙы ул.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән 48 ҡатынды "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Тейешле документ республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Почетлы наградаға биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән әсәләр тәҡдим ителде. Улар араһында - Әлшәй, Асҡын, Ауырғазы, Баймаҡ, Бишбүләк, Бүздәк, Бөрйән, Ғафури, Дүртөйлө, Ейәнсура, Йылайыр, Иглин, Ишембай, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Күгәрсен, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Мәсетле, Мишкә, Миәкә, Тәтешле, Туймазы, Өфө, Учалы һәм Хәйбулла райондары, Күмертау, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларында йәшәүселәр. Хәбәр ителеүенсә, миҙал 1998 йылда булдырылған. "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә 50 мең һум аҡса тапшырыла. Бынан алда бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең күләме 17 241 һум ине.

✓ **Башҡортостанда хәрби хәрәкәттәр инвалидтары өйҙә бушлай социаль хеҙмәттәр менән файҙаланыу хоҡуғына эйә.** Дәүләт Йыйылышы депутаттары һуңғы уҡыуҙа тейешле закон проектын ҡабул итте. Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, бында өйҙә йыйыштырыу, кер йыуыу, гигиена процедуралары, аш-һыу әҙерләү, хаттар ебәреү һәм башҡалар инә. "Бындай ярҙам теге йәки был сәбәптәр (имгәнеү, ауырыу, инвалидлыҡ) арҡаһында үҙ-үҙен хеҙмәтләндерә, үҙаллы йөрөй алмағандарға кәрәк. Мәҫәлән, хәрби хәрәкәттәр инвалидтары ла шундайҙар иҫәбендә. Закон хәрби йәрәхәт һөҙөмтәһендә инвалид булып ҡалған яугирҙәрҙы комплекслы социаль яҡлау өсөн ҙур әһәмиәткә эйә", - тип билдәләне ул. Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына һәм унда ҡатнашыусыларға, "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" һәм "Камауҙа ҡалған Севастополдә йәшәүсе" билдәләре менән бүләкләнгәндәргә, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һауа һөжүменә ҡаршы оборона, һауа һөжүменә ҡаршы урындағы оборона объекттарында, һаҡланыу ҡоролмалары, хәрби-диңгеҙ базалары, аэродромдар һәм башҡа хәрби объекттар төҙөлөшөндә эшләгәндәргә лә ошондай ярҙам күрһәтелә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕР УЧАСТКАҺЫ БИРЕЛӘ



**Башҡортостанда Рәсәй Геройҙарына һәм орден менән бүләкләнгән махсус хәрби операция яугирҙарына бушлай ер участкалары бирелә.**

Тейешле закон 23 ноябрҙә өс уҡыуҙа етенсе саҡырылыш Башҡортостан Республикаһы - Дәүләт Йыйылышының өсөнсө ултырышында ҡабул ителде. Закон проектын республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская тәҡдим итте. Билдәләнеүенсә, ер Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған йәки Рәсәй ордендары менән наградланған махсус хәрби операция ветерандарына бирелә. Әгәр улар хәрби хәрәкәттәр һөҙөмтәһендә йәки алған яраларынан һәләк булһа, ер участкаларын махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаилә ағзалары (ир йәки ҡатын, балиғ булмаған балалар, улар булмаған осраҡта - ата-әсәләр) алырға тейеш. "Ер участкаһы алыу өсөн яугирҙар махсус хәрби операцияла ҡатнашыу тамамланған көнгә үҙҙәренең йәшәгән урыны буйынса урындағы үҙидара органына мөрәжәғәт итә ала. Һәләк булған хәрбиҙең ғаилә ағзалары уның йәшәгән урыны буйынса мөрәжәғәт итергә тейеш", - тине Наталья Полянская.

Махсус операция геройҙарына һәм орден менән бүләкләнеүселәргә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар булараҡ иҫәпкә баҫыу талап ителмәй. Тейешле муниципаль районда, ҡала округында кәмендә өс йыл йәшәү тураһында ҡағыҙә уларға ҡағылмай. Закон рәсми баҫылып сыҡҡас үҙ көсөнә инә.

# ҠАҘНА ХӘЛДӘРЕ НИСЕК?



**Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында Башҡортостан вице-премьеры - финанс министры Лира Игтисамова республика бюджетының төп күрһәткестәре тураһында һөйләне.**

Билдәләнеүенсә, 2024 йылға Башҡортостан бюджетының килем өлөшө - 289 миллиард, 2025 йылда - 285,8 миллиард, 2026 йылда 288,2 миллиард һум күләмендә фаразлана. Сығымдарға килгәндә, киләһе йылда, план буйынса, улар 299 миллиард һум, ә 2025 һәм 2026 йылдарҙа килемгә тиң була.

"Өҫтөнлөклө сығымдар социаль составҡа һәм милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуға ҡағыла. Республикабыҙ 13 милли проектта ҡатнаша, 48 төбәк проектын ғәмәлгә ашыра. Кеше капиталы, уңайлы мөхит һәм иҡтисади үҫеш менән бәйле милли проекттар өсөн алдағы өс йылда бөтәһе 60,5 миллиард һум йүнәлтеү планлаштырыла", - тип билдәләне Хөкүмәт вице-премьеры. Мәҫәлән, 2024 йылда мәғарифҡа 78,2 миллиард йүнәлтеү ҡарала, һаулыҡ һаҡлауға сығымдар - 54,2 миллиард һум, социаль сәйәсәтте бойомға ашырыуға - 43,1 миллиард, мәҙәниәткә - 10,6 миллиард, физик культураға 5,2 миллиард һум бүленә. Киләһе йылда юл фонды 29,9 миллиард һум, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһы - 26,1 миллиард һум, ә ауыл хужалығы 7,9 миллиард һум алырға тейеш. 32,8 миллиард һум республика адреслы инвестиция программаһын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелә. Бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы фонды күләме 2024 йылда 131, миллиард һум була. 2024 йылға республика бюджеты дефициты 10 миллиард һум кимәлендә билдәләнде. 2025 һәм 2026 йылдарға бюджеттың дефицитһыҙ характеристикалары планлаштырыла.

# РӘХМӘТ ӘЙТТЕ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров видеобәйләнеш аша Төбәк үҫеше буйынса Хөкүмәт комиссияһы президиумы ултырышында ҡатнашты. Уны Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин үткәрҙе, тип хәбәр итә Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте.**

Ултырышта инфраструктура, бюджет кредиттары иҫәбенә ҙур күләмле төбәк проекттарын тормошҡа ашырыу барышын ҡаранылар. Башҡортостандың Өфө һәм Нефтекама ҡалаларында объекттар төҙөү һәм реконструкциялау эше, әйтәйек, "Көньяҡ ҡапҡа" проекты сиктәрендә баш ҡаланың транспорт инфраструктураһын яңыртыу һәм "Кузнецов затоны" биҫтәһендә 2 200 урынлыҡ мәктәп төҙөү, Нефтекамала иһә төп канализация насос станцияһын төҙөү һәм таҙартыу ҡоролмаларын реконструкциялау ошо механизм нигеҙендә алып барыла. "Барлыҡ объекттар буйынса раҫланған графикка ярашлы эшләйбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - "Кузнецов затоны" биҫтәһендә тағы бер объект - Ағиҙел йылғаһы аша күпер менән Өфөнө көньяҡтан урау юлы буйынса проект документацияһын әҙерләйбеҙ".

Марат Хөснуллин Башҡортостан етәкселегенә проекттарҙың ваҡытында ғәмәлгә ашырылыуы өсөн рәхмәт белдерҙе. "Башҡортостанда барлыҡ күрһәткестәр буйынса ыңғай үҫеш күҙәтелә. Республика торлаҡты файҙаланыуға тапшырыу йәһәтенән алдынғы. Шәп, артабан да шулай дауам итегеҙ! - тине Марат Хөснуллин. - Беҙ һеҙҙең менән "Транспорт аҙналығы"нда бер нисә проект тураһында һөйләштек. Рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ. Ҙур рәхмәт".

# ПАЛЕСТИНДАР КИЛӘ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Палестинаны ташлап китергә мәжбүр булған граждандар өсөн ваҡытлыса урынлашыу пункттарын ойошторорға ҡушты.**

Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы башлығы Александр Куренков илебеҙҙә Палестина ҡасаҡтарын урынлаштырыу мәсьәләһе буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Ултырышта Палестинанан 250-гә яҡын ҡасаҡты Башҡортостанға ебәреү мөмкинлеге ҡаралды. Шул уҡ ваҡытта төбәктең ҡасаҡтарҙы ҡабул итеү тәжрибәһе иҫәпкә алынды. Хәбәр ителеүенсә, Радий Хәбиров Башҡортостандың дин әһелдәренең һәм халыҡтың Палестинаның тыныс халҡына гуманитар ярҙам күрһәтеү тураһында башланғысын хупланы. Һүҙ дарыуҙар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым ебәреү хаҡында бара. "Башҡортостан һәр ваҡыт яфа сигеүселәргә һәм мохтаждарға ярҙам ҡулы һуҙа. Йылдар буйына Донбасс халҡына ярҙам иттек, Сүриәгә гуманитар ылау оҙаттыҡ, ҡотҡарыусыларыбыҙ Төркиәлә ер тетрәүҙән зыян күреүселәрҙе емереклектәр аҫтынан сығарҙы, республикабыҙ табиптары ковид осоронда Ҡырғыҙстанда һәм Абхазияла сирлеләрҙе дауаланы. Әлбиттә, бөгөн беҙ Палестинала йәшәгән тыныс халыҡтың яҙмышына битараф ҡала алмайбыҙ. Башҡортостанда күптәр беҙгә "Уларға нисек ярҙам итергә мөмкин?" тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт итә. Беҙ уларға мотлаҡ ярҙам күрһәтербеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Яңы 2024 йыл алдынан 15 декабрҙән 31-енә тиклем Өфөлә ылыҫлы ағастар менән сауҙа итеү ойошторола. Шыршы баҙарҙары өсөн халыҡ күп йөрөгән урындар һайланған. "Сауҙа итеү һөҙөмтәләре буйынса тейешле килешеүҙәр төҙөлгән. Шулай уҡ ҙур сауҙа предприятиелары, ауыл хужалығы һәм фермер йәрминкәләре эргәһендә лә өҫтәмә рәүештә шыршы һатыу ойошторола. Яңы йыл ҡупшыҡайын һатыу буйынса урындар һанының үҙгәреүе ихтимал", - тип хәбәр иттеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Өфөлә Конгресс-холл һәм ҡала Советы алдындағы майҙанда яңы йыл ҡаласыҡтарын төҙөү һәм биҙәү өсөн контракт төҙөлдә. Эштәрҙең хаҡы - 41,5 миллион һум. Ҡаласыҡтар 22 декабргә тиклем әҙер булырға тейеш, ғинуар аҙағына тиклем уларҙы тәртиптә тотоу ҙа подрядсының бурысы. Конгресс-холл янындағы 4,9 мең квадрат метр майҙанда 32 метрлыҡ пикселле шыршы, 12 метрлыҡ ҡар тауы, утлы һындар, гирляндалар ҡуйыла. Ә ҡала Советы алдындағы 7,1 мең квадрат метрлыҡ биләмәне 32 метрлыҡ пикселле шыршы, ҡар тауы, боҙҙан яһалған һындар биҙәй.

✓1 декабрҙән ҡала хакимиәте ҡарары буйынса Өфөлә балалар баҡсаһы өсөн түләү арта. Был хаҡта Орджоникидзе районы хакимиәтендә үткән мәктәпкәсә белем биреү буйынса брифингта гуманитар мәсьәләләр һәм мәғариф идаралығының баш белгесе Мәрйәм Корицкая хәбәр итте. Түләү 19 һумға артып, көнөнә 170 һум тәшкил итәсәк. Шулай итеп, әгәр бала ай буйына (21 эш көнө) балалар баҡсаһына йөрөһә, 3570 һум түләргә кәрәк. Түләүҙе арттырыу иҫәбенә мәктәпкәсә йәштәге балалар рационына йәшелсә салаттары, емешеләк, һуттар өҫтәргә вәғәҙә итәләр.

✓Өфөгә фиджитал-спорт буйынса "Киләсәк уйындары" халыҡ-ара ярышының төп трофейын килтерҙеләр. Артабан ул Ырымбурға юлланды. "Байконур" космодромынан трофей тура йыһанға осорола, 2024 йылда кире әйләнеп ҡайтҡас, Ҡаҙанға күргәҙмәгә ҡуйыла. "Киләсәк уйындары"на тиклем йөҙ көндән аҙыраҡ ваҡыт ҡалды. Фиджитал-спорт буйынса ярыштар Ҡаҙанда 2024 йылдың 21 февраленән 3 мартына ҡәҙәр барасаҡ. Бынан алдараҡ киләһе йылда Өфөлә "Рәсәй - спорт державаһы" форумы уҙғарылыуы хәбәр ителгәйне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТУРА БӘЙЛӘНЕШ

# "ХАЛЫҠТЫҢ...

## баһалауы мөһим"

**Был аҙнала Республика Башлығы Радий Хәбиров тура бәйләнеш үткәрҙе. Иҫәбе буйынса бишенсе булған быйылғы сара үҙенең социаль йүнәлештә булыуы менән айырылып торҙо. Республикала йәшәүселәр МХО хәрбиҙәренә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам, социаль туризм, ауылдарҙы үҫтереү, социаль инфраструктура, социаль объекттарҙы ремонтлау һәм хатта телефон аша мутлашыусылар хаҡындағы һорауҙарын бирҙе һәм уларҙың ҡайһы берҙәренә тура бәйләнеш барышында уҡ яуап табылды.**



"Эфир барышында барлыҡ һорауҙарға ла яуап биреп өлгөрмәһәк тә, уларҙың береһе лә иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ", - тип белдерҙе Радий Хәбиров республика халҡын сәләмләп. - Быйыл барлығы 1000-дән ашыу мөрәжәғәт булған. "Тура бәйләнеш"те вазифам ҡушҡанға ойоштормайым, минә халыҡтың хөкүмәт эшен нисек баһалауын белеү мөһим", - тине Радий Фәрит улы.

Тәүге һорау Хәбировтың **МХО** зонаһына барып ҡайтыуына бәйле булды. Ул унда Башҡортостан полктары, шулай уҡ әлеге мәлдә Луганскиҙа эшләүсе табиптар менән осрашыуы тураһында һөйләне. "Ғаиләләрегеҙ нисек?" - тип һорайым уларҙан гел генә. Бер яугир ҙа нindәйҙер хәл ителмәгән мәсьәлә хаҡында өндәшмәне. Сөнки республикала уларҙың яҡындарына ярҙам итеү бик яҡшы ойошторолған", - тине Радий Хәбиров. "Яҡташтарыбыҙҙың хеҙмәт итергә теләге барлығын күргәндән һуң, исемле башҡорт полктары булдырыу хаҡында ҡарар ҡабул иттек һәм был дөрөҫ булды. Беренсенән, уларға ярҙам итеүе енелерәк, икенсенән, командирҙары кем икәнен яҡшы беләбеҙ, өсөнсөнән иһә үҙендеке бер ҡасан да һине насар хәлгә ҡуймаясаҡ һәм ауыр саҡта ташламаясаҡ та. Улар бер-береһенә ныҡлы терәк", - тине милли батальондар хаҡында үҙ фекерен белдереп республика Башлығы. "Республика күрһәткән гуманитар ярҙам һәм адреслы посылкалар яугирҙарға барып етәме?" тигән һорау ҙа яңғыраны. "Командирҙар посылкалар артынан шунда уҡ килә алмауы бар, әммә улар барыһы ла барып етә", - тине Радий Фәрит улы һәм Башҡортостан халҡына бындай ярҙамды йыйыуға индергән өлөшө өсөн рәхмәт белдерҙе.

Әйтеүебеҙсә, күп кенә мөрәжәғәттәр **юлдарға,** уларҙы ремонтлауға бәйле булды. "Быйылдан халыҡ иң йыш зарланған һәм ремонтлауҙы һораған юлдарҙы төҙәкләндерә башланыҡ, бының өсөн 4 млрд һум аҡса бүленде", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы М-12 трассаһын төҙөү темаһына ла туҡталды. Эш күләме ҙур, объект 2024 йылдың аҙағында тапшырылырға тейеш. Әммә федераль трасса төҙөлөшө барышында ауыр техника төбәккә ҡараған юлдарҙы ныҡ боҙа. 2025-2026 йылдарҙа ошо юлдарҙы кире тергеҙеү ҡаралған.

"Тура бәйләнеш" барышында баҡса участкаларына юлдар һалыу эшен дә дауам итеүҙе һоранылар. Әле 66 баҡсаға юл һалынған, 2024 йылда ла был программаға аҡса бүленгән. Шулай уҡ Өфөнөң Зорге урамында урынлашҡан бер балалар баҡсаһы эргәһендәге юлдың насар торошта булыуы хаҡында мәғлүмәт булды. "Өфөгә юлдар һалыуға, төҙәкләндереүгә етерлек аҡса бирәбеҙ. Ике йыл эсендә юлды ремонтларбыҙ. Насар юл - ул ҡурҡыныс бәлә, кешенең дә йәнен көйҙөрә. Республикала, бигерәк тә баш ҡалала насар юлдар булмаҫҡа тейеш", - тине Радий Хәбиров. Халыҡ шулай уҡ баш ҡаланың балалар баҡсалары һәм мәктәптәре янына юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыларҙы теркәүсе камералар ҡуйыуҙы һорай.

Өфөнөң Ленин районы халҡы "Алексеевка ауылына тиклем **яңы күпер** буласаҡмы?" тип мөрәжәғәт итте. Әлеге мәлдә улар тығындарҙа ултырырға мәжбүр. Республика Башлығы билдәләүенсә, бындай проект бар, Салауат Юлаев проспектын Интернациональ урамына тиклем оҙонайтып, күпер һалыу ҡаралған. "Был осраҡта беҙ федераль аҡсаларға өмөт итә алмайбыҙ, ә сумма 20 млрд һумдан да кәм түгел. Шуға ла дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә күпер төҙөү өсөн шәхси компаниялар менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ". Шулай уҡ "Мега" сауҙа үҙәге эргәһендәге юл үткәргесе төҙөлөшө тураһында мәсьәлә хәл ителә, Кузнецов затонынан тура сығыу юлы буласаҡ. Радий Фәрит улы был эштәрҙе башҡарыуҙы саҡ ҡына көтөүҙәрен һораны. Шулай уҡ республиканың популяр туристик юлдары ла насар хәлдә булыуы телгә алынды. Туризм министрлығы туристик объекттарға тиклем юлдарҙы ремонтлау программаһын тәҡдим итә һәм тәүге бындай юл Ишембай районы Ҡуҡрауыҡ шарлауығына буласаҡ.

**Өфө циркын** ремонлау мәсьәләһе лә күтәрелде. 2026-2028 йылдарҙа ремонт өсөн саралар бүленәсәк тип көтөлә, Радий Фәрит улы был эште тиҙләтергә һәм 2025 йылға күсерергә тырышасағын белдерҙе. Реконструкция эштәре иһә иң кәмендә 2 йылға һуҙыласаҡ. "Өфө ҡалаһы II" территорияһында сиркәү төҙөү темаһы ла күтәрелде. "Сиркәү төҙәләсәк урында мәҙәни ҡатлам юҡ, ул унан алып сығылған. Тәүҙә Әр-Рәхим мәсетен төҙеп бөтөгөҙ, тип әйтеүселәрҙә лә хаҡлыҡ барҙыр. Мин күптән әйттем, мәсет төҙөлөшөн үҙем контролдә тотам. Әле тикшереү эштәре бара, сөнки 2005 йылдан алып күп ваҡыт үткән. Быйыл йә киләһе йыл яҙын эштәр дауам итер, тип уйлайым. Ә сиркәү төҙөүгә ҡаршылар күп икән, уларҙы ла тыңларға кәрәк. Шуға ла был урында депозитарий буласаҡ".

**Сәнғәт** үҫеше перспективалары тураһында һүҙ сыҡҡанда, төбәк Башлығы тәүге урынға эшсе ҡулдар етешмәүе проблемаһы сығыуы ихтимал, тип белдерҙе. "Иҡтисад әлеге темптар менән үҫһә, киләсәктә эшселәргә дефицит булыуы бар. Шуға ла предприятиеларға һөнәри колледждар менән бәйләнеште нығытырға кәрәк", - тине ул.

**Салауат Юлаев һәйкәлен** ремонтлау хаҡында ла һөйләшеү булды. "Һәйкәл реконструкциялауға мохтаж, быны аңларға һәм ҡабул итергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров. Эштәр Өфө ҡалаһының 450 йыл тулыуға бәйле юбилей сараларын билдәләгәндән һуң башланасаҡ, сөнки документтар ошо ваҡытҡа әҙер буласаҡ. Реконструкция хаҡы - 300 млн һум. Һәйкәлдә махсус павильонға алып китәсәктәр, был ваҡытта постамент нығытыласаҡ йәки яңыртыласаҡ. Был эш бер йылда ғына тамамланмауы ла бар. Өфө ҡалаһының 450 йыллығын иһә Ҡала көнөндә - июнда түгел, ә август аҙағында үткәреү планлаштырыла.

**Башҡортостан 10-15 йылдан** нисек буласаҡ, тигән һорау ҙа яңғыраны. "Донъя үҙгәреүсән, шуға ла был һорауға яуап биреүе ауыр. Шулай ҙа 2030 йылға тиклем төбәк үҫеше "Башҡортостан 3.0" программаһында сағылыш табасаҡ. Ҙур төбәк етәксеһе булараҡ, минең бурысым - горизонттарҙы билдәләү. 2018 йылда улар минең 310-сы ҡарарымда күрһәтелгәйне. Объектив сәбәптәр һәм был йүнәлештә ныҡлап эшләмәү һөҙөмтәһендә уларҙың ҡайһылары тормошҡа ашманы. Шулай ҙа унда аныҡ маҡсаттар күрһәтелгән һәм киләсәк нисек буласаҡ тигән һорауға бер аҙ яуап бирә. Беҙ уға өлгәшергә тырышасаҡбыҙ", - тине Радий Фәрит улы.

ҠЫҪҠАСА

# ЯРТЫ ҺҮҘҘӘН АҢЛАШАБЫҘ...

**Ҡаҙағстан менән Башҡортостандың тышҡы иҡтисади мөнәсәбәттәре әүҙем үҫешә. Беҙ быны тауар әйләнеше күләмендә, социаль-мәҙәни һәм гуманитар мөнәсәбәттәрҙә, үҙ-ара индустриаль интеграцияла асыҡ күрәбеҙ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Халыҡ-ара бизнес аҙналығы барышында ошо турала белдерҙе.** "Ысынында иһә мөмкинлектәр бик күп. Беҙҙең иҡтисад та оҡшаш. Ҡаҙағстанда бизнес менән шөғөлләнеү структуралары ла беҙгә аңлайышлы. Әлбиттә, уртаҡ тамырҙар, ғөрөф-ғәҙәттәр мөһим роль уйнай. Бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлайбыҙ. Белеүегеҙсә, Рәсәй Федерацияһы һәм Ҡаҙағстан президенттары ҡарары менән киләһе йылда ике ил төбәктәренең форумы Өфөлә ойоштоpола. Был да мөнәсәбәттәрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш. Ҡаҙағстанды стратегик партнер итеп күрәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Ринат Ғайсин Өфө ҡалаһының нигеҙ һалыныуға 450 йыл тулыуға бәйле мәҙәни саралар менән таныштырҙы.** Билдәләнеүенсә, йыл башынан Илдар Абдразаҡов һәм "Владимир Спиваков саҡыра" фестивалдәре, Рудольф Нуриев исемендәге Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале киңеҡ күләмле саралар, А.П. Чехов исемендәге Мәскәү художество театры гастролдәре башлана. Шулай уҡ Рәсәй Милли драма театрының гастролдәре көтөлә. Денис Мацуев фестивале өфөләргә ҡаланың юбилейы айҡанлы шәп музыкаль бүләк булмаҡсы. Бынан тыш, Өфөлә тәүге тапҡыр Третьяков галереяһының һынлы сәнғәт күргәҙмәһе ойоштоpола. Өфө ҡалаһы үҫешенең тарихы тураһында шоу, күләмле художество декорациялары ойоштороу күҙаллана. Өфө амфитеатрында баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн республиканың сәнғәт оҫталары, Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙары ҡатнашлығында байрам концерты була. Мәҙәни сараларҙан тыш, төрлө фестивалдәр ҙә үткәреләсәк.

✓ **Баш ҡаланың "Видеоаналитиканың мобиль комплексы" тип аталған проекты Яһалма интеллект технологияларын үҫтереүгә өлөш индергән өсөн милли премия еңеүсеһе булды.** Был премия РФ Хөкүмәте ярҙамында үткәрелә һәм коммерция һәм дәүләт проекттарында яһалма интеллект ҡулланыуҙың иң яҡшы өлгөләрен билдәләй. Быйыл унда илдең 26 субъектынан 54 ғариза бирелгән һәм төп бүләк Өфөнөң "Мәғлүмәт технологиялары үҙәге" муниципаль учреждениеһы директоры Руслан Ғайсинға тапшырылған. "Майҙа юл инфрастуктураһы объекттарын контролдә тотоуҙың яңы системаһы эшләй башлағайны. Бөгөн беҙ яһалма интеллект ярҙамында юлдағы соҡорҙарҙы, сүп һауыттарының тулып ултырыуын, яҡтыртыу ҡоролмаларының бысраҡ булыуын һ.б. асыҡлайбыҙ һәм мәғлүмәтте ситуация үҙәгенә һәм коммуналь хеҙмәттәргә ебәрәбеҙ. Ҡышын ҡар таҙартыу сифатына ҙур иғтибар биреләсәк" - тип билдәләне Өфө мэры Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған көнәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Күңел төшөнкөлөгө

❖ Был осраҡта киптерелгән алманан компот ҡайнатып, көн дауамында эсеп йөрөү ярҙам итә.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Үҙәк көймәһен өсөн көн һайын ашарға ултырыҙан алда һәм ризыҡланғандан һуң ике ҡалаҡ тоҙланған кәбеҫтә ашарға кәрәк.

### Ангина

❖ Ангина булмаһын өсөн 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ водород перекисы ҡушырға. Шуның менән 1 ай дауамында көнөнә 2 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға кәрәк.

### Ҡан тамырҙары

❖ Ҡан тамырҙарын таҙартыу өсөн тибет медицинаһынан алынған сәйҙе ҡулланырға була. Ҡара сәйгә һөт, бал, мөшкәт сәтләүегеҙ һәм карри ҡушырға. Көн дауамында ошо сәйҙе эсеп йөрөргә.

### Варикоз

❖ Веналарҙың варикозлы киңәйеүенән ҡотолоу өсөн йәймәне (простыня) зәйтүн майына манып, кешене баштан аяғына тиклем шуға төрөп һалырға. Бер сәғәттән дә кәм ятмаҫҡа.

### Гемоглобинды күтәреү

❖ Гемоглобинды күтәреү һәм ҡанды яҡшыртыу өсөн 1 балғалаҡ бал, 1 балғалаҡ кәзә һөтө, 1 туҡылған йомортҡа һарыһы, 5 ҡалаҡ кишер һуты һәм 5 ҡалаҡ сөгөлдөр һутын бергә ҡушырға. Шуны көнөнә 3 тапҡыр эсергә һәм көн дауамында 7 йәшел алма ашарға.

### Бәшмәктән

❖ Бәшмәк булһа, һеркә һәм сей йомортҡаны ҡушып көнөнә ике тапҡыр аяҡ тырнаҡтарына һөртөргә.

### Аҙҡанлылыҡ

❖ Был осраҡта торма, кишер һәм сөгөлдөр һуттарын тигеҙ нисбәттә ҡушып, 2-3 ай дауамында көн һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Туралаҡаҙ, ҡара ерәнсәй**
**(Огарь)**



Ерән төҫтәге ҙур өйрәк, ул ошо төҫө менән башҡа өйрәктәрҙән айырылып тора. Тышҡы ҡиәфәте менән ҡаҙға нығыраҡ оҡшаған. Ҡойроҡ осо ҡара, ҡанатын йәйеп осҡан саҡта ҡанат төбөнөң аҡ, осо йәшел икәне күренә. Ата ҡоштоң төҫө сағыуыраҡ. Ерҙән бик еңел атлап йөрөй. "Аңгг", "аҡк", "ваҡк" тигән тауыш сығара.

Беҙҙең төбәктә юғала барған ҡоштар төркөмөндә. 1954 йылға тиклем Асылыкүлдә оя ҡороуы билдәле. 1958 йылда бер тапҡыр, һуңғараҡ 1996 йылда бер тапҡыр күренә. 1965 йылда Атауҙы күлендә 5 баш, Көньяҡ Үләнле күлендә 3 ҡош осраттыҡ. Бәлки, улар унда оя ла ҡорған булғандыр. 1984 йылда Сибай эргәһендә Төйәләҫ йылғаһында яңғыҙ өйрәкте бер нисә ҡат күрәләр. Урал аръяғында был ҡоштарҙың ҡышлауы тураһында ла мәғлүмәттәр бар. Был яҡҡа ул Ырымбурҙан килгән булырға тейеш.

Апрель башында уҡ осоп килә. Тоҙло һыу яҫҡылыҡтарын үҙ итә. Ҡыр йәнлектәренең ояларында, ярҙа соҡолған урындарҙа, хатта ташландыҡ һарай, тәҙрәләш урындарында оя ҡора. Майҙың тәүге яртыһында 8-12 йомортҡа һала. Инә ҡош 27-29 көн йомортҡа баҫа, ата ҡош уның янында һаҡта йөрөй. Бәпкәләр сыҡҡас, икәүләп ҡарайҙар, ҡайһы берҙә бер нисә ояның бәпкәләрен бергә ҡушалар ҙа, улар өсөн бер ҡара ерәнсәй тәрбиәсе ролендә ҡала.

Һыуҙа ла, ҡоро ерҙә лә аҙыҡ таба. Башлыса үҫемлектәр, шулай уҡ бөжәктәр менән туҡлана. Сентябрҙә йәш ҡоштар ҡанат нығытҡас, баҫыуҙарға осоп, тары менән һыйланалар, күлгә кисен генә әйләнеп ҡайталар. Көҙөн урылған баҫыуҙарҙа, яҙғы осор ужым баҫыуҙарында ла туралаҡаҙҙың күренгәне булды.

Августың аҙаҡтарында йылы яҡтарға оса башлайҙар. Сентябрҙең аҙаҡҡы ун көнлөгөнә тиклем осоп китеп бөтәләр. Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән, 1-се категориялағы һирәк ҡош.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙЫЛ ЗЫҢҒЫРЫ

**"Медицина хеҙмәткәрҙәренең иң мөһим сифаты нимә?" тигәндә, "Үҙ эшенең оҫтаһы булыуы", тип яуап бирер күптәр. Сөнки уларҙың оҫталығы, белеме, тәүәккәллеге һәр кемебеҙҙең иң ҡәҙерле нәмәһен - ғүмерҙәребеҙҙе һаҡлап ҡаласаҡ. Ә был оҫталыҡҡа улар тәү сиратта өлкән коллегаларынан өйрәнә. Бына шуның өсөн дә остазлыҡ төшөнсәһе табиптар араһында бигерәк таралған: һәр шәп белгес кемдеңдер һәләтле уҡыусыһы булып тора. Өфө ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Педагог һәм остаз йылына арнап үткәргән сираттағы осрашыуға тап шундай шәхестәр - медицина фәндәре докторы, профессор, Өфө Хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияһы фәнни-тикшеренеү институтының бүлек мөдире Мәхмүзә Кәлим ҡыҙы Ғәйнуллина, медицина фәндәре докторы, профессор, БДМУ-ның микробиология һәм вирусология кафедраһы мөдире Марсель Марат улы Тойғонов һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты ординаторы, Ишембай районы йәштәре ойошмаһы рәйесе Айтуған Сәлим улы Байисламовты саҡырҙы.**

# ТОРМОШОҢ ЮЛЫНДА...

## остаздарҙың етәкләүе лә мөһим



Үҙенең һәр көнөн кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарыл ҡалыуға ғына түгел, ә уларҙың сәләмәтлеген һаҡларға өндәгән, әүҙем тормош алып барған был милләттәштәребеҙ менән әңгәмә бик ҡыҙыҡлы барҙы. "Табип - ул иң изге, иң мәрхәмәтле, иң шәфҡәтле, әммә бик ауыр һөнәр. Белем алыуға ғына 8 йыл ваҡытың китә, әммә иң мөһиме - һөнәр алғас, үҙеңде йәлләмәйенсә тулыһынса медицинаға бағышларға кәрәк. Кешеләргә хеҙмәт итергә әҙер булһағыҙ ғына табип булығыҙ. Беҙҙе уҡытыусыларыбыҙ шулай тип өйрәтә торғайны һәм хәҙер мин үҙем дә быны бик хаҡ һүҙҙәр икәнен аңлайым", - тине Мәхмүзә Кәлим ҡыҙы әлеге мәлдә баш ҡалабыҙҙың башҡорт гимназия-лицейҙарында белем алған һәм киләсәктә табип һөнәрен һайларға ниәтләнгән йәштәргә мөрәжәғәт итеп. Бер туғандары һәм уларҙың балалары араһында ғына ла 12 табип булған табиптар династияһы вәкиле булараҡ та йәштәргә матур өлгө булған Мәхмүзә Ғәйнуллинаның сығышы бик үҙенсәлекле булды.

- Сәләмәтлек табиптан ғына тормай. Сәләмәтлеккә кешенең физик һәм психик торошо, шулай уҡ социаль хәле лә инә. Мәҫәлән, уның йәшәр урыны, эше, хеҙмәт хаҡы, мөрәжәғәт итер өсөн дауаханалар, кәрәкле әйберҙәрен һатып алыр өсөн магазиндар һ.б. булырға, өйөндә һыуы ағып торорға, сүп-сары сығарылырға тейеш. Шуға ла илдәге демографик хәл өсөн, үлем күрһәткесенең кимәле өсөн дә табип ҡына яуап бирмәй.

Кешенең үҙенән торған нәмәләр ҙә бар. Әйтәйек, кешенең уйҙары ла сәләмәтлеккә йоғонто яһай. Күпме йәшәйәсәкһең - был Аллаһтан, ә бына ошо бирелгән ғүмерҙе нисек йәшәйһең, үҙеңдән тора. Теломералар тураһындағы асыш ошо хаҡта һөйләй ҙә инде. Дөрөҫ туҡланмау, һимереү, экологияның бысраныуы, башҡалар менән талашып йәшәү, аҙ хәрәкәтләнеү, йоҡо туймау, даими стрестар, хроник сирҙәр, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү, D витаминың ҡытлығы теломераларҙың ҡыҫҡарыуына килтерә. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барғандарҙың теломералары, тимәк, ғүмере лә 10 процентҡа оҙонораҡ була. Организмда күп нәмәләр, әйтәйек, йөрәк нисә тапҡыр тибергә тейеш - былар генетик яҡтан алдан билдәләнгән. Беҙҙең йөрәк минутына 60-70 тапҡыр типһә, спортсыларҙың йөрәге 80-90, хатта 200 тапҡыр тибеүе ихтимал. 100 йәшкә еткән спортсылар һирәк күренеш, улар ошо рәүешле йөрәгенең мөмкинлеген ҡыҫҡарта. Быны менән, спорт менән шөғөлләнмәгеҙ, тимәйем, бары тик ҡайһы бер нәмәләр беҙгә нәҫелдән бирелгән, тип аңлатырға ғына тырышам. Әммә сәләмәтлегебеҙгә ниндәй мөнәсәбәттәбеҙ, уға нисек ҡарайбыҙ, быныһы үҙебеҙҙән тора...

Марсель Марат улы иһә үҙ биографияһы миҫалында табип булырға хыялланған ябай ауыл егетенең нисек итеп 32 генә йәшендә фән докторы булып китеүен һөйләне. "Кешенең ике дошманы бар: береһе - тышҡы дошмандарыбыҙ. Икенсеһе, иң яманы - эске дошманы, ялҡаулыҡ. Ялҡаулыҡты еңә алһағыҙ, бик шәп кеше буласаҡһығыҙ. Йәш саҡтан уҡ бейеклеккә үрләйем тигән маҡсат ҡуйығыҙ. Иң башына барып етә алмаһағыҙ ҙа, ошо юлдағы һәр үр - үҙе уҡ еңеү. Бер ҡасан да уҡыуҙан һәм спорт менән шөғөлләнеүҙән туҡтамағыҙ", - тине ул. Марсель Тойғонов йәштәрҙе әле үҙе шөғөлләнгән микробиология һәм вирусология йүнәлеше менән дә таныштырҙы.

- Һәр кеше организмында 100 трлн микроб йәшәй, уларҙы алып, үлсәүгә һалһаң, баш мейеһе кеүек ауырлыҡ сығыр ине - 1,5 кг. Уларҙың ролдәре баһалап бөтөрлөк түгел, эсәктәрҙә йәшәгән ошо микробтар организм өсөн күп функцияларҙы башҡара. 2000 йылдарҙа донъя кимәлендә ҙур тикшеренеүҙәр башланып китте, ғалимдар шунда кеше организмында бөтәһе 24 мең ген барлығын асыҡланы. Сағыштырыу өсөн селәүсендә алһаҡ, унда 35 мең ген. Баҡтиһәң, эволюция барышында кешенең организмы күп кенә функцияларын ошо микробтарға биргән. Улар көн дә беҙҙең өсөн витаминдар, ҡайһы бер аҡһымдарҙы эшләп сығара. Тимәк, етешмәгән гендар ошо микробтарҙың эшмәкәрлегенә һалынған. Ҡыҙыҡһынып китеп, ғалимдар микробтарҙы өйрәнә башлағайны, уларҙа 800 мең ген барлығын иҫәпләне, тап ошо гендар кешенең сәләмәтлеге торошон билдәләй. Ҡайһы бер кешеләр, мәҫәлән, һимеҙлектән йонсой. Эсәктәрендә, тимәк, майҙар алышыныуы өсөн яуап биргән микробтар аҙ миҡдарҙа. Уйлауымса, киләсәктә ошо асыштар нигеҙендә кешенең һаулығын нығытыуға килтерәсәк ниндәйҙер асыштар ҙа көтөлә. Бала тыуған саҡта ошо микробтарҙы әсәһенән ала, күкрәк һөтө имгән саҡта ла күсә улар.

Залдан "Улай булғас, кеше менән кем идара итә - баш мейеһеме, әллә ошо микробтармы?", "Беҙ йәшәр өсөн ашайбыҙмы, әллә ашар өсөн йәшәйбеҙме?", "Микробиолог булыр өсөн ниндәй факультетта белем алырға кәрәк?" тигән шаярыу ҡатыш һорауҙар яңғырауы ла әңгәмәнең тыңлаусылар өсөн бик ҡыҙыҡлы булыуын күрһәтте. "Һеҙгә көлкө тойола ла, был микробтар бик һиҙгер - беҙ ғәшиҡ булһаҡ, улар ҙа ошо һөйөү тойғоларын кисерә, стреста булһаҡ, улар ҙа көйәләнә", - Марсель Марат улының яуабы уҡыусыларҙа был фәнгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ булды.

Башҡорт дәүләт медицина университеты ординаторы булараҡ, Республика онкология диспансерында - онколог, тағы ла икенсе бер дауаханала терапевт булараҡ эшләп йөрөгән, шул уҡ ваҡытта йәштәрҙең төрлө проекттарында ҡатнашып, йәмәғәт эштәре менән дә шөғөлләнергә ваҡыт тапҡан Айтуған Байисламов мәктәп эскәмйәһенән уҡ маҡсатлар ҡуйып, уларға ынтылырға кәрәклеге тураһында һөйләне. Бөгөнгө балалар, йәштәр араһында әүҙемлек һүрәнләнеп, һүнеберәк ҡалған бер мәлдә быңдай йәштәрҙең өлгөһө, һүҙе бик тә урынлы, тип уйланыла. Буласаҡ табиптың сығышын залдағылар, моғайын, күнеләнә киртеп ҡуйғандыр, кемендәләр маҡсат осҡоно ла тоҡанғандыр, тип ышанғы килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл башланған бик матур күренеш - остазлыҡ мәктәптәре эшмәкәрлеге артабан да дауам итһә ине. Нисек кенә булмаһын, борон-борондан һәр кеше үҙе белгәнде йәштәргә өйрәтеп ҡалырға тырышҡан, сәсәндәрҙең дә үҙ шәкерте, оҫталарҙың да үҙ өйрәнсеге булған, һөнәр нескәлектәрен, ғүмерең буйына туплаған тәжрибәңде ерҙә ҡалдырыуҙың берҙән-бер юлы был. Мәктәп уҡыусыларын әле уҡ һөнәргә йәлеп итеү, киләсәктә милләтте һәләтле белгестәр менән тәьмин итеүҙең дә яҡшы юлы был. Шуға ла уның быйылғы йыл менән үткәндәрҙә тороп ҡалмауы шарт.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



Турбаҫлыларҙа ут культы киң таралған, быға үлгәндәрҙең ҡәберҙәре өҫтөндә яндырылған ҙур усаҡ эҙҙәре булыуы дәлил. Турбаҫлыларҙың, гундар кеүек, вафат булған туғандары иҫтәлегенә усаҡ тирәләй ҡатмарлы йола уҙғарыуҙары бик ихтимал. Турбаҫлы ҡәберҙәрендә ут культы таралыу менән бәйле мәйет яндырыу осраҡтары булыуын айырым билдәләп үтергә кәрәк. Улар, мәҫәлән, Кушнаренко ҡәберлегендә һәм Өфө ҡалаһында (Галанов урамында) табылған. Килтерелгән миҫалдар Халыҡтарҙың бөйөк күсеше эпохаһы үҙенсәлектәренең бер сағылышы булған турбаҫлы ҡәбиләләренең этник составы ҡатмарлы булыуын, ҡәбиләләрҙең, халыҡтарҙың, уларҙың матди һәм рухи мәҙәниәттәренең кинәт буталыуын һәм ҡушылыуын күрһәтә.

Турбаҫлы ҡәбиләләре керамикаһының яҫы төплө төркөмөнөң VI - VIII быуаттарҙа Урта Волга буйындағы именьков мәҙәниәте керамикаһына оҡшаш булыуын айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алыу фарыҙ. Уларҙы һауыттарҙың формаһы һәм пропорциялары, етештереү техникаһы яҡынайта. Ошо ике мәҙәниәттең яҡынлығы торлаҡтарының - ярым ер өйҙәренең бер төрлө формаларында, биҙәүес предметтарының, ҡоралдарының һәм эш ҡоралдарының оҡшаш составында сағылыш таба.

Ошо оҡшашлыҡтың барлыҡҡа килеүе сәбәптәрен асыҡлау археологтар араһында төрлө ҡараштар тыуҙырҙы. Мәҫәлән, ҡайһы бер тикшеренеүселәр IV-VI быуаттар арауығында именьковсыларҙың бер өлөшөнөң Көнбайыш Урал буйына күсеп килеүҙәре һәм турбаҫлы мәҙәниәтен формалаштырыуҙа ҡатнашыуҙары хаҡында фараз итте. Тап шуға күрә Көньяҡ Уралда табылған яҫы төплө керамиканы бында именьковсылар килтергән, тип фекер йөрөтә улар. Был ҡарашты ҡайһы бер төҙәтмәләр менән ҡабул итергә була. Именьков ҡәбиләләре турбаҫлыларҙан үлгәндәрҙе ерләү йолаһы кеүек мөһим мәҙәни һыҙаты буйынса айырылып тора: уларҙа ерләү һәр саҡта ла мәйетте яндырыу менән башҡарыла, ҡәбер өҫтө бер ҡасанда ер өйөмө менән ҡапланмай, ҡәберҙәрҙә соҡоп эшләнгән уйымдар һәм киртләстәр булмай. Тимәк, именьковсылар ерләү йолаһын башҡа бер дини принциптарға ярашлы башҡарған. Керамиканың оҡшашлығына килгәндә, күрһәң, быны бик ябай ғына аңлатып була: махсус тикшеренеүҙәргә ярашлы, ошо яҫы төплө керамика төркөмө примитив көршәк яһау ҡоралында эшләнгән, һәм был техник яңылыҡ, моғайын, көршәксе-һөнәрселәр эшмәкәрлеген киң күләмдә стандартлаштырыу мөмкинлеген биргән.

Шул уҡ ваҡытта археология Урал буйы халҡының айырым төркөмдәренең Урта Волга буйына үтеп инеү осраҡтарын һәм быһын киреһен билдәләй, һәм быны ике күрше төбәк халыҡтарының тәбиғи аралашыу процесы тип ҡарарға кәрәк.

Фәндә турбаҫлыларҙың килеп сығышы хаҡында берҙәм фекер юҡ. Уларҙың иртә тимер быуаты эпохаһының дак-сак-массагет ҡәбиләләренең туранан-тура вариҫтары булыуы хаҡындағы ҡарашты яҡлаусылар күп. Генетик яҡтан уларҙы антропологик типтарының яҡын булыуы, уртаҡ биҙәмәләрҙә йәшәүҙәре, ерләү йолаһы (ҡәберҙәрҙең формаһы, ут культы) һәм матди мәҙәниәт (иң элгәре - керамика) берләштерә.

Ошо уҡ һыҙаттары буйынса иртә турбаҫлы мәҙәниәтен (IV-V бб.) Көнбайыш Себерҙең һуң саргат мәҙәниәте менән сағыштырып була. Ошо параллелек турбаҫлы мәҙәниәте формалашыуында саргат ҡәбиләләренең бер өлөшөнөң ҡатнашҡан булыуы ихтималлығын күрһәтеп тора. Әммә тупланған материалдар турбаҫлы мәҙәниәтенең үҙенең генетик тамырҙарының көньяҡ далалары ҡәбиләләре менән бәйле булыуын күрһәтә. Ошо планда джетыасар мәҙәниәте (б.э. II-IV бб.) ҡәберлектәре материалдары бик ышаныслы, ул Кангюй халҡынан ҡалған. Беҙ уларҙа ҡәбер типтары, керамика, бил ҡайыштары йыйылмалары, биҙәүестәр (мәрйендәр, фибулалар, һырғалар) һәм ҡоралдар кеүек ошондай күләмле материалдарҙың ныҡ яҡын булыуын күрәбеҙ.

Уларҙың хронологик яҡтан яҡын булыуы айырым иғтибарға лайыҡ. Ошо параллелдәр фонында турбаҫлы ҡәбиләләренең төп халҡының Кангюй кеүек ҙур илдән күсеп килеүе хаҡында фекер тыуа.

Әгәр ҙә Көньяҡ Урал һәм Кангюй халыҡтарының күп быуатлыҡ этномәҙәни бәйләнештәрен иғтибарға алһаҡ, әле әйтелгән фекерҙе һис шикһеҙ ҡабул итеп була.

Турбаҫлы ҡомартҡылары керамикаһының көньяҡ аналогтары үрҙәрәк һанап кителгәндәр менән генә тамамланмай. Көтмәгәндә уға иң яҡын параллелдәр территориаль яҡтан йыраҡ булмаған Урал-Ҡаҙағстан далаларындағы "мыйыҡлы" ҡурғандарҙа һәм VI-VIII быуаттарға ҡараған селенташ тибындағы ҡомартҡыларҙа табылды. Улар хаҡында түбәндәрәк ентекләп әйтеп үтербеҙ, ә бында ошо түңәрәктәге ҡомартҡыларҙың дөйөм һаны 60-тан ашыу булыуын һәм уларҙа турбаҫлы ҡомартҡыларының романов тибындағы керамикаһына бик тә яҡын булған яҫы төплө керамик һауыт-һаба табылыуын билдәләп китәйек. Әйткәндәй, Көньяҡ Уралдың һәм Төньяҡ Ҡаҙағстандың дала зонаһындағы III-V быуаттарға ҡараған ҡурғандарҙа яҫы һәм түңәрәк төплө һауыт-һаба етерлек табылған, һәм был яҡын параллелдәрҙе турбаҫлы ҡәбиләләренең һәм дә уларҙың матди мәҙәниәтенең төп элементтарының көньяҡ сығышлы булыуына өҫтәмә аргумент итеп ҡарау фараз.

Нияз МӘЖИТОВ.
Әлфиә СОЛТАНОВА.
Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.

(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре

62-се гвардия атлы полкы 12 апрелгә ҡаршы төндә 20-се гвардия ПВО дивизионының бер эскадроны менән Турья йылғаһы аша сыҡты һәм, Блаженник - Ворба - Калинувка маршруты буйлап марш менән барып, Владимир-Волынскийҙан төньяҡ-көнбайыштараҡ 4 саҡрымдар тирәһендәге урманда тупланды. Полк тимер юлын һәм шоссе юлдарын ҡулға төшөрөү маҡсатында алышҡа инде. Гвардия лейтенанты Воронецтың сапер взводы тимер юлы полотноһына сығып, уны дүрт урындан шартлатты. Әммә дошман ошо районға өҫтәмә пехота көстәрен килтереп, дүрт танк ярҙамында беҙҙең полкты контратакаланы. 62-се гвардия полкы яугирҙары сая алышты. Немецтар артабан да резервтарын килтерә алмаһын өсөн тимер юл эшелонын шартлатырға ҡарар ителде. Был бурыс гвардия капитаны Х.М. Мирсаяповтың 3-сө эскадронына йөкмәтелә. Урман һуҡмаҡтары буйлап урап үтеү маневрын яһап, эскадрон тимер юлының Владимир-Волынский - Замостье участкаһына сыға. Тиҙҙән килеп етеп килгән тимер юлы составы тауышы ишетелә. Мирсаяпов командаһы бирә: "Атакаға әҙерләнергә!" Яугирҙарҙың бер өлөшө тимер юл күпере һаҡсыларын юҡ итә, башҡалары автоматтарҙан казарманан йүгереп сыҡҡандарҙы ҡырып һала. Тимер юл күперен һаҡлаусы гарнизон юҡ ителә. Саперҙар күперҙе шартлата.

Был Владимир-Волынскийға яҡын урынлашҡан Пивник утары эргәһендә була. 62-се гвардия полкының ҡалған ике эскадроны дошмандың бер-бер артлы ҡабатланып торған атакаларын кире ҡаға. Бөтәһе 4 атака кире ҡағыла. Ҙур юғалтыуҙарға дусар булһа ла, полк ҡуйылған бурысты үтәй. Комдивтың бойороғо менән ул алыштан сығарыла.

Барса участкаларҙа дошмандың контратакалары кире ҡағылһа ла, атлы дивизияның хәле һәр сәғәт һайын ауырлаша бара. Владимир-Волынскийға немецтарҙың танкылар менән көсәйтелгән пехота дивизияһы килеп етә. Беҙҙең дивизия оборона тотҡан позицияларҙың ике яғынан да немец һалдаттары колонналары Турья йылғаһына яҡынлаша. Улар беҙҙең атлыларҙы йылға аша сығыу урынынан ҡыҫырыҡлап сығарырға ниәт итә. Һуғыш припастары бик аҙ ҡала, шул көйө дошман тылында ҡалыу мөмкин түгел. Комдив тиҙ арала йылғаның уң яҡ ярына кире сығырға ҡарар итә. 7-се гв. корпусының ҡалған ике дивизияһы шулай уҡ ауыр хәлдә ине - һөжүм барышында юғалтыуҙар күп була. 47-се армияның командующийы, генерал-лейтенант В.С.Поленов иң элгәре ут һыҙығынан 16-сы гв. атлы дивизияны алып сығырға булды, ул Турья йылғаһының уң ярында Ягодна - Загатки участкаһында оборонаға күсте.

14 апрелдә дошман корпус биләгән участкаларҙы көслө артиллерия утына һәм бомбаға тотто. Немецтар 14-се гв. дивизияһы позицияларына бәреп керә. Уның командиры, гв. генерал-майоры Г.П. Коблов резервтан 114-се танк полкын индереһә лә, дошман урынында ҡала. Комкор 14-се дивизияны ла Турья йылғаһының уң ярына сығарырға бойора. Әммә йылға аша тик 56-сы гв. полкы ғына сығып өлгөрә, 54-се гв. полкына сигенеү юлы ябылып ҡала.

Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.
(Дауамы бар).

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Ot" - үлән. "Ot undi" - Ҡашғариҙан руссаға "трава выросла (үлән үҫте)", - тип тәржемә ителгән.** Башҡортса - үлән унды. Хәҙерге башҡорт телендә боронғо төрки телендәге "от" һүҙе урынына "үлән" тип әйтелә.

Әммә башҡорт телендә аҙ ғына үҙгәртелә биргән "ут" һүҙе лә һаҡланып ҡалған, ул мәғәнәһе буйынса шул уҡ "от" һүҙе менән бер иш.

"Утлау" - үләнле ялан, көтөүлек. "Аттар утлап йөрөй", - тибеҙ. Йәнә "утау" тигәнебеҙ сүп үләндәрен йолҡоп таҫлау. Ҡыштарын малдарға бесәнде "утлыҡ"ҡа һалабыҙ. Төп ауылдан ситкәрәк китеп, үҙҙәренә оҡшаған урында йорт һалып йәшәгән урынды утар, тип аталғаны мәғлүм. Әммә был һүҙҙең тәү мәғәнәһе шул уҡ боронғо "от" йә иһә "ут" һүҙе менән мәғәнәләш - ул малдарҙы ҡышлата йә иһә йәйләүгә сығара торған урынды, шул урындағы ҡоролмаларға, мал аҫрай торған махсус аҙбарҙарға ҡарата ла берҙәй ҡулланылған. Шул ыңғайы рустарҙың "хутор", украиндарҙың "хутір" тигән һүҙҙәренең боронғо төрки ерлегендә хасил булыуына ышанып була. Шулай ҙа Европа этимологтары был һүҙҙәрҙең йә боронғо үрге немец һөйләшендәге "huntari", йә иһә боронғо швед телендәге "hundari" тигән һүҙҙәрҙән килеп сыҡҡан, тип фекер йөрөтә. Әммә ошо һүҙҙәр "округтың бер өлөшө" тигәнде генә белдерә. Рустарҙың да, украиндарҙың да "хутор"ҙары нәҡ башҡаларҙан айырымланып көн иткән кешеләрҙең бәләкәй генә торлаҡтарына ҡарата ҡулланыла. Сит ил лингвистары төрки телдәрен һәйбәт белмәгәс, һүҙ тамырын янылыш аңлата.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, башҡорт телендә "ут" һүҙенең икенсе мәғәнәһе лә бар: ут яндырыу, ут алыу, ут сығыу, ут төртөү һ.б. Иң яҡын күршең "ут күрше" була, был әүәл шырпы һирәк осрай торған замандарҙан ҡалған - утлы, күҙлы күмер алыр өсөн күршеңә барырға тура килгән. Ошо омонимдар араһында лә мәғәнәүи ерлек бар: ут - үлән һәм ут - ялҡын сығарыу. Боронғо дәүерҙәрҙә кешеләр ут табыуҙың бер нисә әмәлен ҡулланған. Иң отошлоһо - саҡматаш сағып, осҡон сығара белеү. Әлбиттә, осҡондан ялҡын сығарыу өсөн дә осталыҡ кәрәк булғандыр. Быныһ өсөн ошо архаик замандарҙа ныҡ итеп киптерелеп, осҡон тейеү менән янып китерлек бер генә нәмә - әлеге лә баяғы "от - ут - үлән" ҡулланылыуына шик юҡтыр.

Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.
(Дауамы. Башы 42-46-сы һандарҙа).

✓ *Беҙ, төркиҙәр, бөйөк дала цивилизацияһын ҡороусы халыҡтарҙың вариҫтарыбыҙ. Беҙҙең уртаҡ ата-бабаларыбыҙ барса донъяға билдәле иҫ киткес мәҙәни мираҫ ҡалдырған.*



# КҮСМӘ ХАЛЫҠТАР

## йәки Бөйөк дала цивилизацияһы

**20-21 ноябрҙә баш ҡалабыҙҙың "Торатау" Конгресс-холында бик фәһемле һәм күркәм сара уҙғарылды: "Боронғо дәүерҙә һәм урта быуаттарҙа Үҙәк Евразияның күсмә донъяһы" тип аталған III Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияла (III Мәжитов уҡыуҙарында) Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, Төркиәнән, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан, Әзербайжандан килгән ғалимдар ҡатнашты. Был сара күренекле башҡорт археологы, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы ойошторолдо.**

Конгресс-холл фойеһында конференцияла ҡатнашыусылар иғтибарына Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында һаҡланған боронғо ҡулъяҙмалар һәм һирәк осрай торған китаптар экспозицияһы, тарихи китаптар күргәҙмәһе һәм "Мәжитов: ғүмер оҙонлоғондағы экспедиция" тип аталған фотокүргәҙмә тәҡдим ителде. Күптәрҙә Өфө районының "Подымалово-1" ҡомартҡыһында ҡаҙыу эштәре барышында табылған, урта быуаттарға ҡараған һөнәри-етештереү үҙәге артефакттары ҡыҙыҡһыныу уятты.

Баш ҡалабыҙға килгән билдәле ғалимдарҙы Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко, Өфө фән һәм технологиялар университетының ойоштороу үҫеше буйынса проректоры Илгиз Ҡәҙерғолов, БР Фәндәр академияһы Стратегик тикшеренеүҙәр институтының Иҗтимағи-мәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш Йосопов тәбрикләне.

Пленар ултырышта сығыш яһаған башҡорт ғалимдарынан РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, философия фәндәре докторы Зөһрә Рәхмәтуллина һәм БР ФА академигы, философия фәндәре докторы Фәнил Фәйзуллин Н.А. Мәжитовтың ғалим, тарихсы-археолог, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихын өйрәнеүгә арналған ғилми хеҙмәттәренә, халҡыбыҙҙың милли аңын һәм үҙаңын үҫтереү өсөн алып барған тынғыһыҙ эшмәкәрлегенә юғары баһа бирҙе. Тарих фәнендә хасил булған Мәжитов мәктәбе киләсәк быуындар өсөн дә ғилми фиҙаҡәрлек өлгөһө булып ҡаласаҡ.

Пленар һәм секциялар ултырыштарындағы сығыштарында Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Рәсәй төбәктәре ғалимдары шулай уҡ төрки халыҡтарының боронғо һәм урта быуаттарҙағы тарихы булмышы проблемалары буйынса үҙҙәре алып барған тикшеренеүҙәре өсөн күренекле археолог Нияз Мәжитовтың ғилми мираҫының ни тиклем әһәмиәтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов үҙенең сығышында фәндә тарихи ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтеү осраҡтарына юл ҡуймау зарурлығының ни тиклем мөһим икәнлегенә баҫым яһаны. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер билдәле татар тарихсылары башҡорт халҡының боронғолоғон инҡар итеүгә, уның килеп сығышын һәм тарихи яҙмышын күрәләтә фальсификациялауға ҡоролған хеҙмәттәрен академик баҫма рәүешендә бөтөн Рәсәйгә тарата. Былай ялған ғилми хеҙмәттәрҙе ваҡытында фашлау фарыз", - тип белдерҙе тарихсы.

Конференция барышында республикабыҙҙың Шишмә районындағы Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләре (мавзолейҙары) хаҡында иҫкә алынды. Көньяҡ Уралда һәм Волга буйында бындай тарихи объекттар бик һирәк осрай. Ваҡытында уларға әллә ни иғтибар ҙа булманы, Башҡортостандың ошо иҗтимағи-мәҙәни мираҫ объекттары ташландыҡ хәлдә ҡала килде. Шуныһы ҡыуаныслы: хәҙер бында археологик, биологик тикшеренеүҙәр, реставрация һәм ҙур төҙәлеш эштәре ғәмәлгә ашырыласаҡ. Шишмә районы биләмәһендә "Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейы" проекты тураһында Данир Ғәйнуллин һәм "Архтамға" эксперт-проект бюроһы етәксеһе Рөстәм Әлибаев ентекле мәғлүмәт бирҙе. Ҙур күләмле эштәр башланып ҡына тора: майҙаны 500 кв.м булған визит үҙәге төҙөлә, Турахан кәшәнәһенә табан һуҡмаҡ төҙөкләндерелә.

***Конференцияның пленар ултырышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Р.Ф. Хәбиров та ҡатнашты.***

- Һеҙҙең "Мәжитов уҡыуҙары"нда ҡатнашыуығыҙ - беҙҙең өсөн ҙур мәртәбә... Тарихсының роле айырыуса әһәмиәтле. Ул - беҙҙең халыҡтарыбыҙҙың уникаль үҙенсәлектәре һағында тороусы, тәрән белемле белгес.

Көньяҡ Урал Көнсығыш һәм Көнбайыш диалогының мөһим үҙәге булараҡ, традициялар һәм көнитмеш рәүештәре киҫелешендә тора. Тап ошонда Рәсәй составына ингән милли республикаларҙың дәүләтселеге ярала, күп халыҡтарҙың мәҙәни нигеҙҙәре хасил була.

...Ошо өлкә буйынса эксперттарҙы төҙәләсәк музей сиктәрендә хеҙмәттәшлеккә саҡырабыҙ. Беҙ тап күсмә цивилизациялар хаҡында һүҙ алып барабыҙ. Был башҡорт, татар, яҡут, венгр йә иһә ҡаҙаҡ цивилизациялары ғына түгел. Һүҙ тотош, барса күсмә цивилизациялар хаҡында. Беҙҙең бурыс - уларҙың ваҡыттар араһындағы хәрәкәтен, мәҙәниәттәре үҫешен күрһәтеү. Шуға күрә беҙҙең проект барса күсмә цивилизацияларҙың тоҡомдарына ҡыҙыҡлы булырға тейеш.

...Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейының бер маҡсаты, ғилми йүнәлештән тыш, ағартыу эшмәкәрлеге булырға тейеш. Шул иҫәптән бында төрлө йәштәге кешеләр өсөн заманса мәғрифәт комплексы буласаҡ. Музей янында беҙ ат ярыштары манежын, һөнәри ауыл һәм башҡа этнотарихи локациялары булған Башҡорт аты һәм һунар ҡоштары үҙәген төҙөйәсәкбеҙ. Ошо майҙансыҡтарға яҡын урында ҡунаҡтар өсөн уңайлы шарттары булған "Күскенсе" тип аталасаҡ заманса ҡунаҡхана төҙөү ҙә күҙаллана. Музейҙы формалаштырыуҙың төп принциптары: тарихилыҡ, хаҡлыҡ һәм фәнни ҡаҙаныштарға таяныу, - тине Радий Фәрит улы ғалимдарға мөрәжәғәт итеп.

Дискуссия барышында тарих фәндәре докторы, Көньяҡ Урал дәүләт университетының Евразия тикшеренеүҙәре буйынса ғилми-мәғрифәти үҙәгенең әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Сергей Боталов бынан ике йыл элек Башҡортостанда Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейын булдырыу бер фантастик идея итеп кенә ҡабул ителгәндәй булды, тине. "Ә бөгөн беҙ музей комплексының үҙенең киләсәктәге һынланышын алабарыуын күрәбеҙ, һәм оҙаҡламай унда ҙур визит үҙәге хасил буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Турахан мавзолейы янында археологик тикшеренеүҙәр уҙғарыла, улар бер нисә мөһим асыш эшләргә мөмкинлек бирҙе", - тип белдерҙе ғалим.

Өфө фән һәм технологиялар университетының "Археология 2.0" ғилми-мәғрифәти үҙәге директоры Илшат Бәхшиев конференцияла ҡатнашыусыларҙы 2023 йылда республика биләмәләрендә алып барылған археологик ҡаҙыу эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. "Беҙ остазыбыҙ Нияз Мәжитовтың "археолог экспедицияла эшләй" тигән принцибын тотабыҙ. Ғалимдың археология фәненә индергән өләшө бик ҙур һәм ул Рәсәй һәм сит ил ғалимдары өсөн фекерләү предметы булып ҡала. Беҙ быйыл һигеҙ объектта археологик ҡаҙыу эштәре алып барҙыҡ. Айырыуса Турахан кәшәнәһе янындағы некрополь иғтибар үҙәгендә булды, унда 12 билдәле булмаған ҡәбер табылды. Шулай уҡ урта быуаттарҙа һөнәр һәм етештереү үҙәге булған "Подымалово-1" ҡомартҡыһын тикшерҙек, уның потенциалы ахырынаса асылып бөтмәгән. Тупланған мәғлүмәттәр Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейы фондын тулыландырасаҡ", - тине Илшат Бәхшиев.

**Шулай итеп, башҡа республикаларҙан, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан килгән ғалимдар фекер алышыуҙарҙа ихлас ҡатнашты, ғөмүмән, улар Башҡортостанға, Өфөгә килеп, башҡорт донъяһы менән яҡындан танышыуҙары менән бик тә ҡәнәғәт булды. Һүҙҙе уларға бирәйек.**

***Ҡырым АЛТЫНБӘКОВ, Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһынан, рәссам-реставратор, "Ҡырым утрауы" Ғилми-реставрация лабораторияһы етәксеһе, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Беҙ, төркиҙәр, бөйөк дала цивилизацияһын ҡороусы халыҡтарҙың вариҫтарыбыҙ. Беҙҙең уртаҡ ата-бабаларыбыҙ барса донъяға билдәле иҫ киткес мәҙәни мираҫ ҡалдырған. Хәҙерге төрки илдәрендә табылған археология ҡомартҡылары ошоға дәлил. Тарихи Башҡортостанда табылған сармат алтыны кеүек артефакттар Ҡаҙағстан биләмәләрендә лә бар. Әйтәйек, башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында нәҫелдәшлек кенә түгел, ә мәҙәни яҡынлыҡ та күҙгә салынып тора. Бер-беребеҙ менән үҙ телдәребеҙҙә аралашҡанда беҙгә тылмас кәрәкмәй. Мин башҡорт дуҫтарымда ҡунаҡта булғаным бар. Бишбармаҡ булһынмы, ҡаҙы йә иһә ҡаҙылыҡмы - һис бер айырмаһы юҡ; бында булғанымда үҙ өйөмдәгеләй тоямын үҙемде. Ғилми эшкә килгәндә, мин шәхсән ҡаҙыу эштәре барышында табылған артефакттарҙы реставрациялау, йәғни уларҙың ысынбарлыҡта нисек булғанын визуаль рәүештә тергеҙеү менән шөғөлләнәм. Мәҫәлән, ошо конференцияла "Уржар жрицаһы"ның төҫ-ҡиәфәтен, кейемдәрен, биҙәүестәрен, ни менән шөғөлләнеүен объектив рәүештә тергеҙә алыу тәжрибәһе менән уртаҡлаштым. Был табылдыҡ ҡомартҡы үҙенә күрә уникаль күренеш. Әүәл батшалар, арҙаҡлы сардарҙар, яугирҙар ҡәберлектәрендә ерләнгән кешеләрҙең һындарын тергеҙә инек, был осраҡта хәрби кейемдәрен, төрлө ҡоралдарын, йыртҡыс һындары һүрәтләнгән әйберҙәрҙе һ.б. артефакттарҙы ҡулланып була. Ә "Уржар жрицаһы" - бөтөнләйе менән икенсерәк ҡомартҡы, бында алтын һәм көмөш биҙәүестәр, аҡһөйәк тоҡомонан булған ҡатындар ғына кейә алған кейем ҡалдыҡтары һәм, шул уҡ ваҡытта, дауалау өсөн ҡулланылған үҫемлек орлоҡтары, баш кейемен биҙәүсе Феникс ҡошоноң символик һынланышы ошо үтә лә һирәк осрай торған ҡомартҡы эйәһенең жрица, йә иһә дауалаусы-бағымсы булыуына ышаныслы дәлил булды.

Башҡорт ғалимы Нияз Мәжитов асҡан һәм ентекле тикшергән "Өфө-II" ҡаласығының заманында Европа карталарында теркәлгән Башҡорт ҡалаһы икәнлегенә һис бер шик юҡтыр. Әйтерһегеҙ: нисек инде ул күсмә ҡәбиләләр ҡалалар төҙөп, шунда йәшәй башлаған, тип. Бында бер ниндәй ҙә сер юҡ. Дала кешеләренең төп хужалыҡ итеү йүнәлеше - малсылыҡ. Уларға үҙ заманында бер көтөүлектән икенсеһенә, үләне мулыраҡ булғандарына күсеп йөрөргә тура килгән, әлбиттә. Ә ҡырағай аттарҙы эйәләштереү дала тормошона ҡырҡа үҙгәреш индерә - был иң тәүге транспорт сараһы. Әммә хатта йәйрәп ятҡан дала киңлектәрендә лә абсолют күскенселек булмаған. Йәмғиәт үҫеше барышында хеҙмәт бүленеше барлыҡҡа килә: кемдер көтөүсе, кемдер - ер эшкәртеүсе, һунарсы, кемдер - яугир, кемдер мәғдән ҡаҙыусы

***"Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейының бер маҡсаты, ғилми йүнәлештән тыш, ағартыу эшмәкәрлеге булырға тейеш. Шул иҫәптән бында төрлө йәштәге кешеләр өсөн заманса мәғрифәт комплексы буласаҡ. Музей янында беҙ ат ярыштары манежын, һөнәри ауыл һәм башҡа этнотарихи локациялары булған Башҡорт аты һәм һунар ҡоштары үҙәген төҙөйәсәкбеҙ. Ошо майҙансыҡтарға яҡын урында ҡунаҡтар өсөн уңайлы шарттары булған "Күскенсе" тип аталасаҡ заманса ҡунаҡхана төҙөү ҙә күҙаллана. Музейҙы формалаштырыуҙың төп принциптары: тарихилыҡ, хаҡлыҡ һәм фәнни ҡаҙаныштарға таяныу", - тине Радий Фәрит улы ғалимдарға мөрәжәғәт итеп.***

✓ ***Билдәле ғәрәп илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙландың башҡа бер ҡулъяҙмалары ла һаҡланып ҡалған. Әгәр был мәғлүмәт дөрөҫ булһа, Ибн Фаҙландың Башҡорт ҡалаһына килеүе һәм бында 500 кешелек ҙур мәсет булыуы раҫланасаҡ.***



# ДОНЪЯҺЫ,

## хаҡында

һәм металл иртеүсе, уны эшкәртеүсе. Ҡорал-ҡоралдар, шул уҡ ат дағаларын, өҙәнге-ауыҙлыҡтарҙы, биҙәүестәрҙе, ювелир әйберҙәрен эшләр өсөн металл эшкәртеү үҙәктәре асыла, ә улар далала түгел, ҡалаларҙа урынлашҡан була. Быны бер кем дә инҡар итә алмай.

***Рөстәм АБДУМАНАПОВ, Ҡырғыҙ Республикаһының Томск ҡалаһындағы почетлы консулы, тарих фәндәре кандидаты:*** Өфө ҡалаһына тәүләп кенә килгәнмен. Ҡалағыҙ иҫ киткес матур, ғилми конференция һәйбәт тәьҫораттар ҡалдырҙы, бик күп ҡыҙыҡлы сығыштар тыңланды, ә башҡа тарафтарҙан килгән ғалимдар менән аралашыу күңелдәребеҙгә хуш килде. Һеҙҙә "Өфө-II" ҡаласығын һаҡлап алып ҡалыу проблемаһы бар икәнен беләбеҙ. Ғөмүмән, археологик ҡомартҡыларҙы өйрәнеү менән бер рәттән уларҙы ҡурсалау археологтарҙың мөһим бурысы ул. Улар бит халыҡтарыбыҙҙың матди һәм рухи мәҙәниәттәре тамырҙарын күрһәтә, йәшәйеш ағасы тамырына балта менән сабыу кеүек хилафлыҡтарға юл ҡуймау зарур.

***Вячеслав КОТОВ, тарих фәндәре кандидаты, археолог, РФА Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре:*** Бөгөнгө ҙур ғилми конференция күренекле башҡорт археологы Н.А. Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл тулыуына арналған. Беҙ, тарихсылар, уның менән ғорурланабыҙ: Нияз Абдулхаҡ улы үҙенең ғилми эшмәкәрлегендә бары тик урта быуаттарҙағы Көньяҡ Урал проблемалары менән генә сикләнеп ҡалманы, ул, универсаль ҡарашлы ғалим булараҡ, күп йылдар дауамында тупланған археологик материалдар нигеҙендә башҡорт халҡының иртә этногенезы өлкәһендә ҙур асыш яһаны. Көньяҡ Урал территорияһында таш быуатынан башлап урта быуаттарға тиклем арауыҡта тупланған археологик артефакттарҙы ентекләп өйрәнеп, Нияз Мәжитов урындағы автохтон һәм көньяҡ далаларынан күсеп килгән ҡәбиләләрҙең матди һәм рухи мәҙәниәттәре менән башҡорт халҡының мәҙәни мирасы араһында туранан-тура күсәгилешлек булыуын иҫбатланы. Беҙ, йәшерәк быуын археологтары, уның менән йыш аралаштыҡ, фекерҙәребеҙ менән уртаҡлаштыҡ, хатта ки ғилми бәхәстәр ҙә ҡора инек. Ул киң һәм тәрән ҡарашлы ғалим-аналитик булараҡ танылыу тапты, ғилми эшмәкәрлегендә археология өлкәһенән башҡа сығанаҡтарҙы ла урынлы һәм маҡсатлы ҡуллана алды: этнография, картография, лингвистика, фольклор, мифология материалдарын ҡыйыу рәүештә ғилми әйләнешкә индерҙе. Һөҙөмтәлә Н.А. Мәжитов Көньяҡ Уралда һәм уға яҡын ятҡан далаларҙа йәшәгән боронғо ҡәбиләләрҙең этногенезын эҙмә-эҙлекле өйрәнеп, ҙур ғилми хеҙмәт яҙҙы һәм нәшер итте. Ул башҡорт халҡының ғына түгел, ошо ғәйәт киң географик арауыҡта күп быуаттар дауамында йәшәп килгән башҡа этностарҙың да килеп сығышын өйрәнеүгә тос өлөш индерҙе. Көньяҡ Урал - Евразия халыҡтары хәрәкәте киҫешкән бөйөк юл саты, һәм ошонда барған тарихи процестарҙы ентекләп өйрәнеү ғилми яҡтан үтә ҡыҙыҡлы. Евразия далаларында туҡтауһыҙ хәрәкәт бара, бәрелештәр, һуғыштар, яулап алыуҙар булып тора. Ә Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы зонаһы күсеп китергә мәжбүр ителгән байтаҡ ҡына ҡәбиләләр өсөн һаҡланып ҡалып була торған территорияға әйләнә. Әлбиттә, сит тарафтарҙан килеүселәр урындағы халыҡ вәкилдәре менән аралаша, туғанлаша башлай, бер мәҙәниәт икенсеһенә ыңғай йоғонто яһай, этник үҫеш процестары көсәйә бара. Иң мөһиме - барса ҡәбиләләр өсөн уртаҡ булған рухи мәҙәниәт формалаша. Уның иң сағыу өлгөһө - башҡорттарҙың "Урал батыр" эпосы. Уның сюжетында, тексында үтә боронғо дәүерҙәргә генә хас булған байтаҡ ҡына күрһәткестәр булыуы асыҡланды. Был грандиоз әҫәр башҡорт халҡының рухи-поэтик мираҫының төп нигеҙен тәшкил иткән.

Каспий буйы һәм Көньяҡ Урал арауығында тәүләп ҡырағай аттар ҡулға эйәләштерелгәс, малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡтар тарихында яңы этап башлана - йыраҡ араларға күсеп йөрөү, сауҙа итеү өсөн уңайлы шарттар барлыҡҡа килә. Ғөмүмән, йылҡысылыҡ үҫеше этнос үҫешенә яңы импульс бирә, был формалаша барыусы башҡорт этносының мәҙәниәтендә киң сағылыш тапҡан. Ошо йәһәттән күсмә ҡәбиләләрҙең дөйөм кешелек цивилизацияһына индергән өлөшөн баһалап бөткөһөҙ, тип әйтергә була. Бында бына нимәгә иғтибар итеү зарур: абсолют рәүештә, даими күсеп йөрөүсе ҡәбиләләр боронғо дәүерҙәргә ҡарай, ул Евразия далаларына хас күренеш. Көньяҡ Уралды алһаҡ, бында даими күсеп йөрөүгә бер нинди ҙә мохтажлыҡ булмай. Мәҫәлән, башҡорттарҙың яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә йәйләүгә сығыуын бер нисек тә күскенселек билдәһе итеп ҡарап булмай, быны малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтың күнегелгән хужалыҡ итеү рәүеше, тип кенә нарыҡларға мөмкин.

***Флорит СӨНГӘТОВ, тарих фәндәре кандидаты, археолог:*** Н.А. Мәжитов тарафынан ентекләп өйрәнелгән "Өфө-II" ҡаласығы - Рәсәй кимәлендәге ҡиммәтле тарихи объект, урта быуаттарҙа картограф Герард Меркатор тарафынан Европала нәшер ителгән атласта тап Ҡариҙел (Өфө) йылғаһының Ағиҙелгә ҡушылған урынында Башҡорт (Паскерти) ҡалаһы күрһәтелгән. Бында табылған археологик артефакттар күп нәмә хаҡында һөйләй. "Өфө-II" ҡаласығы федераль кимәлдәге тарихи-мәҙәни ҡомартҡылар иҫәбенә инә, һәм ул закон нигеҙендә һаҡланырға, ҡурсаланырға тейеш. Шуға күрә ошо ҡомартҡы биләмәһендә ниндәйҙер капитал төҙөлөштөң булыуы мөмкин түгел, югиһә, был күрәләтә законды боҙоу булыр ине. Өфө ҡалаһы биләмәләрендә әленән-әле боронғо Башҡорт ҡалаһы менән бәйле артефакттар табылып тора, шул уҡ Көнсығыш сығыу юлын төҙөгәндә ошо ҡаланың һуңғы осорона ҡараған объект табылды. Мәҫәлән, бында табылған мисәттәр бик ҡыҙыҡлы: шундай мисәттәрҙең башҡорт старшиналарында булыуы билдәле. "Подымалово-1" ҡомартҡыһында ҡаҙыу эштәре барышында бик етди материалдар табылды. Был ҡомартҡы Алтын Урҙа дәүләтенең һуңғы осорона ҡарай. Башҡорт халҡының этногенезы мәсьәләһенә килгәндә, Нияз Мәжитов был проблеманы комплекслы өйрәнеүҙе хуп күрҙе. Археолог факттар менән эшләй, ә уларҙы тикшергәндә яҙма сығанаҡтарҙы ҡулланыу фарыз. Беҙ барса сығанаҡтарҙы белеп тә бөтөрмәйбеҙ әле. Бына яңыраҡ Ирандан алынған бер факт мәғлүм булды: беҙгә билдәле ғәрәп илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙландың башҡа бер ҡулъяҙмалары ла һаҡланып ҡалған. Әгәр был мәғлүмәт дөрөҫ булһа, Ибн Фаҙландың Башҡорт ҡалаһына килеүе һәм бында 500 кешелек ҙур мәсет булыуы раҫланасаҡ. Беҙ антропология, генетика фәндәре аша күп асыштар яһай алырбыҙ, тип уйларға ерлек бар. Мәҫәлән, б.э. V быуатында йәшәгән кеше һөйәктәренән генетик материал алып, уның генетик үҙенсәлектәрен хәҙерге кешеләрҙеке менән сағыштырып булыр ине. Фән тик тормай, яңы технологиялар барлыҡҡа килә, шуға боронғо ҡомартҡыларҙы киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу зарур.

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, Башҡортостан Республикаһы Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры:*** Һуңғы осорҙо Башҡортостандың тарих фәне һәм археологияһы өсөн уникаль ваҡыт, тип әйтер инем. Бына былтыр ғына бөтөн донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһе янында ошо исемдәге уникаль музей комплексы төҙөлөп, сафҡа индерелеү менән меңәрләгән кеше ошо үтә һирәк осрай торған ҡомартҡы менән шул музей эсендә генә йөрөп таныша ала. Беҙ халҡыбыҙҙың палеолит эпохаһынан башланған боронғо тарихын бөтөн донъя халыҡтарына таныта алабыҙ хәҙер. Шүлгәнташ тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы хәҙер Рәсәйҙең иң яҡшы музейҙары иҫәбенә инә. Бына әле Башҡортостанда Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейын төҙөү тарих фәнен, археологияны үҫтереү өсөн ҡеүәтле стимул буласаҡ. Ошо музейҙың ғилми концепцияһын ғәмәлгә ашырыуҙа ғалимдарыбыҙҙың ҙур бер төркөмө эшләй: археологтар, тарихсылар, этнологтар, антропологтар, биологтар ҡатнашлығында мөһим тикшеренеүҙәр алып барыла. Музей бинаһары өсөн яңы йыһаздар алына, улар төҙөлә башланы инде. Хәҙерге заманда фән һәм технологиялар тиҙ үҫешә, улар ярҙамында археология өлкәһендә яңы асыштар яһап буласаҡ. Мәҫәлән, пилотһыҙ осоу аппараттары ҡулланыла башланы, улар ярҙамында ерҙән күренмәгән объекттарҙы табып була. Беҙҙең алдыбыҙҙа бер мөһим бурыс тора - тарихи ҡомартҡыларҙы киләсәк быуындарға имен-аман тапшыра алыу. Улар ошондай объекттарҙы зарар килтермәй генә тикшерә аласаҡ. Бына киң билдәле Филлипов ҡурғандары ла ахырынаса асып бөтөлмәгән, Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарында кальцит аҫтында ҡалған һүрәттәрҙе лә киләсәк быуын ғалимдары өр-яңы методтар менән тикшерә аласаҡ. Бығаса шул уҡ ҡаҙыу эштәрен тупаҫ инструменттар - көрәк, кәйлә ярҙамында башҡарҙылар, ул мәҙәни ҡатламдарға емергес тәьҫир итә. Шуға күрә тарихи ҡомартҡыларҙы консервациялап, һаҡлап алып ҡалыу хаҡында ла онотторға ярамай.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**



***Нияз Абдулхаҡ улы үҙенең ғилми эшмәкәрлегендә бары тик урта быуаттарҙағы Көньяҡ Урал проблемалары менән генә сикләнеп ҡалманы, ул, универсаль ҡарашлы ғалим булараҡ, күп йылдар дауамында тупланған археологик материалдар нигеҙендә башҡорт халҡының иртә этногенезы өлкәһендә ҙур асыш яһаны. Көньяҡ Урал территорияһында таш быуатынан башлап урта быуаттарға тиклем арауыҡта тупланған археологик артефакттарҙы ентекләп өйрәнеп, Нияз Мәжитов урындағы автохтон һәм көньяҡ далаларынан күсеп килгән ҡәбиләләрҙең матди һәм рухи мәҙәниәттәре менән башҡорт халҡының мәҙәни мирасы араһында туранан-тура күсәгилешлек булыуын иҫбатланы.***

✓ ***Етәкселек итеү юҡ ине, аҡыллы етәксе булманы араларында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шуға ла оло бер көтөү балыҡ, ҡамалып, һаман ярға яҡынлашты. Әсләм-балыҡ һыу тамам һайығып ҡырсынлы яр яҡынайғас йәнасыҡҡа йәнә бер һикерҙе.***






Тәүҙә дәртле генә атлаған Әсләм яйлап арый башланы. Хәйер, ул физик арыу ҙа түгелдер, ә тәүге эмоциональ күтәренкелектең һүнә барыуылыр, судҡа һуңлауынан тыуған күңел төшөнкөлөгөләр. Өр-яңы туфлиҙар кейгәйне, йәнәһе, тегендә матур күренә, аяҡтарын, бигерәк тә һул яҡ сыңарсай бармағын ҡыҫа, өйкәй башланы, етмәһә. Бәләкәйерәкте алған, ахыры. Был юлға аяҡтары күнеккән иҫкерәк нәмә кейһә булған да бит. Әйтәйек, кеды йәки сандалый. Асфальттан атламаҫын, урман юлынан барасағын белә ине. Юҡ, башы эшләмәне, еңел уйланы. Әсәһе лә өндәшмәне. Ул да, күркәм йөрөһөн, тип уйлағандыр. Сөнки гел генә, ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк, тип ҡабатларға ярата һәм бәләкәйҙән Әсләмдең бөхтә йөрөүен талап итте, әле лә талап итә.

Аяҡтары аҫтында - кипкән ағас ботаҡтары, ер өҫтөнә сығып ятҡан йыуан тамырҙар. Етмәһә, атлаған һайын урман ҡуйыра, ағастар бейегәйә, яҡтылыҡ һүрәнәйә бара. Юлы ла бер юғала, бер төҫмөрләнә, унан барған һуҡмағынан ике яҡҡа беленер-беленмәҫ ваҡ һуҡмаҡтар айырылып сығып аптырата. Әсләм уларҙың ныҒыраҡ тапалғанын, ҡырҡа боролош яһамай тураҡ барғанын юғалтмаҫҡа тырыша. Оҙон юл тик тура ғына һуҙылырға тейеш, ул киҫкен боролошло була алмай. Ҡаршыһына кеше осрамауы, һыбай йәки арбалыларҙың йөрөмәүе лә ғәжәп. Ауылдар араһында ғәҙәттә кеше йөрөп ята торғайны ла. Район үҙәгенә китә торған юлда хәрәкәт булырға тейештер бит. Һәм был, дөрөҫ бараммы икән һуң, тигән ҙур шик уята Әсләм күңелендә. Был шик тау башынан ысҡынған ҡар өйөмөнөң аҫҡа тәгәрәгән һайын ҙурая барғаны һымаҡ, арта бара, арта бара.

Ниһайәт, байтаҡ атлағас, балта туҡылдауы, бензин бысҡыһы шыжлауы, уфылдап-илап оҙон ағас ҡолауы тауыштары ишетелде. Ағас ҡырҡалар, тимәк, кешеләр бар. Әсләмдең эсенә йылы инде, тимәк, һорай, белешә ала район үҙәгенә илтер юлды. Һәм ул туфлиҙары ҡыҫҡанлығын да онотоп, аҙымдарын ҡыҙыулатты.

Ағастар кинәт бөттө. Өйҙә ҡорғанды асҡан һымаҡ тирә-яҡ ҡапыл яҡтырып китте. Ҡояш байымаған, ярайһы уҡ бейектә ине әле. Биш-алты кеше йылдам хәрәкәтләнеп ағас эше менән мәшғүл. Берәүһе бензин бысҡыһы менән йыға, икенсеһе йығылғанды ботай, өсөнсөһө үлсәп, кәрәкле оҙонлоҡта турап йөрөй, дүртенсеһе ат менән бер урынға һөйрәттерә. Арыраҡ, юлдан эстәрәк, тейәгестәре, машиналары ултыра, шунда уҡ усаҡ яна, йыуан төпһәләрҙә ҡашығаяҡ, сәйнүк, ҡоромға батҡан биҙрәләре, ботаҡҡа эленгән рюкзак-төйөнсөктәре, кейемһалымдары күренә.

Әсләм һуҡмаҡҡа яҡыныраҡ йөрөгән тәүге егет янына барҙы. Ул биленә тиклем сисенгән, йылтырап торған тәнендә һелтәнгән ыңғайға төйөмлө мускулдары уйнай, йоҡа триконан ғына, башында - шыйыҡ һыйыр иҙмәһенә оҡшап кәпәсе йәйелеп ята. Яшыҡ бит-йөҙөн шырт һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, ҡалын ҡаштары керпектәренә тиклем һәлберәп төшкән. Аяҡтарында ҡыҫҡа ҡуңыслы кирза итектәр, тимәк, армияла десантник булып хеҙмәт иткән, ҡулдарында аҡ бирсәткәләр.

- Һаумыһығыҙ! - Әсләм егеттең янына барып баҫты. Әммә егет уны ишетмәне лә, күрмәне лә, ахыры, әйләнеп тә ҡарамаңы, һаман һелтәнеүен белде. Аптырап икенсегә өндәште Әсләм, китеп барған район үҙәгенең исемен дә атап, дөрөҫ бараммы шунда, тип тә өҫтәне. Был юлы ла яуап бирмәне урмансы. Тамам ғәжәпкә ҡалған Әсләм тапанды-тапанды ла, тегенең янынан китергә мәжбүр булды - күргеһе, ишеткеһе килмәгән кеше янында әрһеҙләнеп нисек баҫып тораһың? Ишетмәйҙер тиһәң, ҡолағы бар, күрмәйҙер тиһәң, күҙҙәре бар.

Икенсе эшсе янына туҡтаны ла иҫәнләшеп, йәнә юл тотҡан ауылдың исемен атап, дөрөҫ бараммы, тип һораны. Тәүгеһенән олораҡ күренгәс, быныһы ҡабырғаһын ҡуймаҫ, аңлатыр, өйрәтер, тип өмөтләнгәйне лә, өмөтө аҡланманы, илтифат күрһәтмәне быныһы ла. Терәлеп тигәндәй янында баҫып торған Әсләмгә ул күтәрелеп тә ҡараманы, хатта, ҡамасаулама, һинең ҡайғың юҡ, күрәһең бит, эштәмен, тигән ҡиәфәттә, күҙенә кереп йонсотҡан себенде ҡыуған ише ҡул һелтәне лә, янынан китеп үк барҙы. Бына һиңә мә! Был ни хәл? Нишләп был урмансылар һуҡыр ҙа, һаңғырау ҙа һуң? Етәкселәре бер кем менән дә һөйләшмәҫкә, аралашмаҫҡа ҡушҡанмы? Законһыҙ ағас йығыусылармы әллә? Һы-ы, кеше осрауына ниндәй шатланып килде, бушҡа булды, юлы сәйер, хатта уңышһыҙ башланды, хәйерлегә булһын.

Байтаҡ баҫып торҙо Әсләм урман ҡырҡыусыларҙың ҡылыҡтарын аңлай алмай. Аңларлыҡ түгел ине уларҙың тәртибе, әҙәмсә түгел ине. Нишләһен, юлын дауам итергә мәжбүр булды - тороуҙан фәтүә юҡ, ҡояш байымаҫ элек ыратырға ла, район үҙәгендә йәшәүсе апаһына - әсәһенең бер туған һеңлеһе - барып етергә кәрәк. Иртәгә иртәнсәк суд бинаһын эҙләп табыр һәм, барыһын да асыҡлап, ҡайтыу яғына боролор.

Тиҙҙән асыҡлыҡ бөттө, йәнә ҡара урман башланды, беленер-беленмәҫ тар һуҡмаҡҡа ҡараңғылыҡ ятты. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп яй ғына атлай торғас ер өҫтөнә быуар йыландай сығып ятҡан йыуан ағас тамырҙарына эләгеп йығылып тубығын, ҡулдарын ауырттырҙы. Һул аяғын өйкәүенә түҙә алмай туфлиҙарын систе: бармағының тиреһе һыҙырылып ҡанға туҙғайны. Был килеш артабан атларлыҡ түгел. Әсләм аяҡ кейемен ҡулына тотоп алды. Әммә оҙаҡ бара алманы, йәнә әлеге тамырҙарға аяғын бәрҙе.

Йайлап урман эсе тамам ҡараңғылыҡҡа сумды. Шуға ла артабан атлауҙан мәғәнә юҡ - беленер-беленмәҫ һуҡмаҡ ишаратынан ситкә сығып аҙашыуың ихтимал. Әсләм бер йыуан ҡарағай төбөнә сүгәләне. Йәйге төн ҡыҫҡа, нисек тә таң атырыр әле. Һәрмәнеп юл япрағы эҙләне, әллә шуны, әллә шуға оҡшаш башҡа йәйенке япраҡты йолҡто ла һул аяғының бармағына урап, носкийын кейҙе. Рюкзагынан май һыланған икмәк телеме, ит киҫәге, һөтлө сәй алып ризыҡланды. Ярай ҙа шуларҙы алырға башы еткән. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙенең башы етмәҫ ине, юл хәлен белеп булмай, һалайым әле шуларҙы, тип әсәһе көсләп тигәндәй биштәренә тыҡты. Һәм бына кәрәкте лә. Әсләм арҡаһын ағасҡа терәп күҙҙәрен йомдо. Һәм юлға сығыуына беренсе тапҡыр үкенде.

Күк күкрәүенә тертләп уянды. Бысҡаҡлап ваҡ ямғыр яуа. Бер мәлгә ҡайҙалығын аңлай алмай ултырҙы. Өшөгән. Өҫ-башы лысма һыу. Хәйер, йоҡламағандыр ҙа, арығанлыҡтан ойоп ҡына ултырғандыр. Ҡулдары, бите буйлап ҡырмыҫҡалар, әллә ниндәй бөжәктәр йөрөй, тешләй, салбары, күлдәге эсенә тулғандар. Әсләм һикереп тороп баҫты ла битен, муйын, елкәһен, күлдәгенең һәҙәптәрен ысҡындырып эсендә, арҡаһында йөрөгән хәшәрәттәрҙе һыпырҙы. Урман эсе дөм-ҡараңғы, шомло, ағас баштары һелкенгән, ҡоро ботаҡтарҙың һынып ергә төшкәне, төнгө ҡоштарҙың осоуы, ниндәйҙер йән эйәләренең япраҡ араларында йөрөүе ишетелә. Ай, юҡҡа сыҡты хәйерһеҙ юлға, былай төнгә ҡалырын, урманда төн сығырын белһә, һис ҡуҙғалмаҫ ине. Әйтте әсәһе, кискә ҡарай сыҡмайһыңмы әллә, барып етә алмаҫһың, иртәгә иртүк ҡуҙғалырһың, тине. Ҡәтғи әйтмәне, кәңәш рәүешендә әйтте, әммә Әсләмгә әсәһе һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк булған. Юҡ, ҡараңғы төшкәнсе барып етәм, әллә ни йыраҡ түгел дә, тип үҙһүҙләнде. Олоно тыңламаған, оролған дә бәрелгән, тигәндәре тап шул булалыр. Оролоп-бәрелеп йөрө инде быңа. Еттең, ти! Ултыр инде бына хәҙер дөм ҡараңғы урман эсендә күшегеп. Плащ һымаҡ нәмә лә алмаған. Өҫтөндә йәйге йоҡа куртка ла, ҡыҫҡа еңле күлдәк. Бараһы еренә нисә саҡрым ҡалғанын да, күпме ара атлағанын да белмәй.

Уяулы-йоҡоло ултырғанында, әллә өҫтөнән ямғыр яуып торғанға инде, һыуға бәйле бер төш күрҙе. Имеш, Еҙемдә йылым менән балыҡ тоталар. Әсләм балыҡсы түгел, ул - балыҡ, тик кеше ҡиәфәтендәге балыҡ. Береһенән-береһе таҙараҡ бер нисә ир, яр башында тегеләй-былай йүгергеләп аҡыра-баҡыра күрһәтмә биреүсе берәүҙең бойороғона буйһоноп, ифрат оҙон һәм бейек йылымды ярға тарта. Йылым ҡамауында - ҙур балыҡ көтөүе. Эрерәктәре, сораҡтары йылым өҫтөнән һикереп ҡаса, аңыштары, вағыраҡтары аҡ ҡалҡыуыстарҙан өркөп һикерә алмай, тегеләй һуғылып, былай һуғылып йылым тартылған ыңғайға яйлап ярға эркелә бирә. Әсләм дә бер нисә тапҡыр өҫкә һикереп ҡараны, әммә ауыр кәүҙәһен һыуҙан айыра алмай кире ҡолап төштө. Йылым аша һикереүҙән тыш ҡайһылыр урында кескәй тишек шәйләп байтаҡ балыҡ, бында инде вағыраҡтары, шунан сығып ҡаса, эрерәктәре һыймай, унан килеп ниңәлер өркә лә. Ләкин йыуан кешеләрҙең береһе, тишекте шәйләп, әлеге йыртыҡты ике яҡлап тартып бәйләне. Балыҡтар араһында паника ҡупты, йылым буйлап эркелешеп йөрөй башланы, һөҙөмтәлә күбеһе йылым тоғона эләкте, илауҙар, һыҡрауҙар китте, ҡарғауҙар яңғыраны. Аңралыҡ көслө ине шул араларында, һикергән саҡта бер-береһенә ҡамасаулау, тишектән сыҡҡан саҡта бер-береһенең ҡойроғонан тешләп эскә тартыуҙар, тәүҙә мин, юҡ мин, тип талашыуҙар күп ине. Етәкселек итеү юҡ ине, аҡыллы етәксе булманы араларында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шуға ла оло бер көтөү балыҡ, ҡамалып, һаман ярға яҡынлашты.

Әсләм-балыҡ һыу тамам һайығып ҡырсынлы яр яҡынайғас йәнасыҡҡа йәнә бер һикерҙе, бәлки, өмөтөн өҙөп һуңғы тапҡырҙыр, бейеккә осто, йылымдың теге яғына, иреккә сыҡтым инде, тип шатланып уйлап та өлгөрмәне, йылым артынан атлаған йыуан бәндәнең йөҙөнә килеп бәрелде лә, дөрөҫөрәге, теге Әсләмде маңлайы менән эскә һирпеп ебәрҙе. Әсләм шап итеп кире йылым эсенә ҡоланы. Ошо бәрелгән арала ул уның һимеҙ йөҙөн, эскә ултыртылған ас ҡыҫыҡ күҙҙәрен, сәсе ҡырылып алынған йылтыр башын шәйләп өлгөрҙө... Бөттөм, эләктем, был мине айғолаҡтан эләктерҙе тигәндә уянып китте...

...Япраҡ араларынан һарҡҡан һүрән яҡтылыҡ, урман эсендәге ҡараңғылыҡты яйлап шыйыҡлатты, төнө буйы яуған ямғыр ҙа, ниһайәт, туҡтағандай итте. Әсләм ауыр итеп ҡалҡынды, бар быуындары ла һыҙлаған һәм таралырға әҙер кәүҙәһен саҡ ҡуҙғатып бер нисә аҙым яһаны, лысма һыу кейемен сисеп һығырғамы икән әллә, тип бераурыҡ уйланып торҙо, унан мәғәнәһе булмаҫ, атлағанда тәндә кибер әле, тип юлын дауам итергә ҡарар итте.

Ауылға еткәндә, тамам яҡтырғайны. Ярышып әтәстәр ҡысҡыра, һыйырҙар баҡырыша, быҙауҙар өҙөлдәй, һарыҡ-кәзә мөзөлдәй. Ара-тирә көтөүсенең ҡәнәғәтһеҙ тауышы ишетелеп ҡала. Йоҡоларынан уянып етмәгән кешеләр яй хәрәкәтләнеп малын ауыл осона ҡыуа. Килеп еттем шикелле, тип ҡыуанды Әсләм, иртәнге ауыл тормошон күргәс. Ауыл ярайһы ғына ҙурҙыр, ахыры, район үҙәге шулай булырға тейештер ҙә, бер нисә урамлы, бейек, бөхтә итеп һалынған йорттар байтаҡ. Төн үткәргән еренән әллә ни алыҫ та булмаған, йәнә бер ынтылһа, кисә кистән килеп еткән дә булған икән. Кем белгән былай яҡын икәнен?

Йыйылған малды баҫыу яғына ебәрмәй ҡамап тотҡан көтөүсе янына килде лә иҫәнләште, был район үҙәгеме, тип һораны. Ҡарт ағас олоно кеүек суғырмаҡлы йөҙлө, башына тар тирәсле керле эшләпә, өҫтөндәге төҫһеҙ халаттымы, плащтымы яҫы һалдат ҡайышы менән быуған. Резина калуштар кейгән оло ғына йәштәрҙәге көтөүсе битараф ҡарашын яй ғына шыуҙырып, Әсләмде башынан аяғынаса һынсыл ҡарап сыҡты. Ҡырыҫ йөҙөнә сикһеҙ аптырау ғәләмәте ятты, әйтерһең дә, негрҙы йәки сит планетанан килеп төшкән йән эйәһен күрә. Көттөрөп кенә баш сайҡаны ла Әсләмгә артын борҙо.

- Нисек? Ниндәй ауыл һуң? Исеме? - саҡ әйләндереп һорай алды ғәжәпләнгән Әсләм.

Көтөүсе ауыҙ эсенән генә нимәлер мөгөрҙәне, әллә ауыл исемен атаны, әллә ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе, Әсләм төшөнмәне.

- Йыраҡмы? Нисә саҡрым?

- Ат юлы менән ун ғына булыр. Кәзә һуҡмағынан атлаһаң, яҡыныраҡ инде. Алты-ете самаһы.

Саҡрымдар һанынан бигерәк Әсләмде көтөүсенең һөйләшеүе ҡыуандырҙы, юҡһа, кисәге ике урмансы һымаҡ был да өндәшмәһә, харап ҡына итә инде, тип ҡурҡа ине. Ул ғына араны атлар, көн саҡ башланып тора. Бәлки, кәзә һуҡмағын да табыр. Иң мөһиме, барыр йүнәлеше төҫмөрләнде.

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

*ИЖАДХАНА*

# МӘЛДЕ ТУҠТАТЫР КӨС...

## рәссамдарҙа

**Кемдәр генә хыял итмәй икән ваҡыт тигән аттың ялынан матҡып тотоп, уны ебәрмәҫкә, бераууҡҡа булһа ла үҙендә ҡалдырырға... Юҡ шул, бар, тотоп ҡара ваҡытты, ҡыҫаларға кәпсәп индереп ҡара! Аллаһы Тәғәлә барыбер ижадсыларға ваҡыт мәлен бераууҡҡа ғына тотор-сағылдырыр, уларҙың хис-тойғоһо, һиҙемләүе, донъяны ҡабул итеүе аша башҡаларға ла шунан өлөш алыр, тәмен тойор, төҫөн күреп ҡыуаныр, күңелен үҫтерер форсат биргән.**



Һүҙ сәнғәте һүҙ ҡеүәһе менән арбаһа, һынлы сәнғәт иһә мең-мең төҫтәрҙе айырым бер фәлсәфә, бирмеш, күсермеш, тойомлау арҡылы береүе менән ҡәҙерле һәм баһалы. Һынлы сәнғәт. Был оло һәм икһеҙ-сикһеҙ ижад донъяһына кемдәр генә баш тығып ҡарамаған да, кемдәр генә уға ғашиҡ булмаған! Урал аръяғының һынлы сәнғәт һөйөүселәренә Сибайҙағы Камил Вәлиев исемендәге сәнғәт колледжы уҡытыусыһы Рәзидә Хисаметдинованың исеме күптән таныш. Уның эштәре республика һәм төбәк-ара байтаҡ күргәҙмәләрҙә үҙенең лайыҡлы урынын билән, сәнғәт һөйөүселәр һәм тәнҡитселәр тарафынан юғары баһа алды. Ҡылҡәләм оҫтаһы башҡорт һынлы сәнғәте үҫешенә тос өлөш индереп, халҡыбыҙҙың рухи-мәҙәни үҫешенә булышлыҡ итә килә.

Рәзидә Хисаметдинова 1968 йылда Хәйбулла районының үҙәге Аҡъярҙа донъяға килгән. Уға бер йәш тулмаҫтан ата-әсәһе Йылайыр районының Юлдыбай ауылына күсеп килә. Рәзидә өсөн Юлдыбай - кесе Ватан да, уны оло сәнғәт юлына әйҙәгән изге ер ҙә. Ялан-урман зонаһының иҫ киткес тәбиғәте кескенәнән булаҫаҡ рәссамдың күңеленә мең балҡышын уйған, ижади ҡомары үҫеүгә булышлыҡ иткән, яңынан-яңы асыштарға илһамландырған.

Мәктәптә уҡыған сағында уҡ ҡыҙсыҡ рәсем дәрестәренә мөкиббән китеп ғашиҡ була, һүрәт төшөрөүгә әүәҫлеге арта. Махсус түңәрәктә шөғөлләнеүе уның һәләтен тағы баҙыҡлайтып, асып ебәрә. Рәсем уҡытыусыһы Р.М. Шәрипов та үҙенең уҡыусыһындағы тәбиғи һәләтте күреп, уны артабан асырға, үҫтерергә ярҙам итә. 1985 йылда тыуған мәктәбен тамамлаған Рәзидә Башҡорт дәүләт педагогия институтының художество-графика бүлегенә уҡырға инә.Үҙенең хеҙмәт юлын дипломлы белгес булараҡ Өфөнөң 49-сы һанлы мәктәбендә рәсем уҡытыусыһы булараҡ башлай ул.

Артабан ҡыҙ үҙенең яҙмышын йәш рәссам Червон Хисаметдинов менән бәйләй һәм йәш ғаилә Силәбе өлкәһенә күсеп китә. Рәзидә Арғаяш районы Аяҙғол мәктәбендә рәсем, һыҙма һәм хеҙмәткә өйрәтеү дәрестәрен уҡыта. 1997 йыл ике рәссамдың яҙмышына үҙ төҙәтмәһен индерә - район һынлы сәнғәт күргәҙмәһендә Урал аръяғынан килгән ҡунаҡтар Червон менән Рәзидәнең эштәрен күреп "аһ" итә һәм үҙҙәрендә яңыраҡ ҡына асылған Сибай сәнғәт мәктәбенең сәнғәт бүлегенә эшкә саҡыра (ул саҡта әле Өфө сәнғәт училищеһының филиалы). Йәштәр был тәҡдимде бик риза булып ҡабул итә һәм 1998 йылда Урал аръяғының баш ҡалаһы булған Сибайға күсеп килә.



Бөгөн Рәзидә 30 йыл педагогик хеҙмәт йылына эйә оҫтаз, ижадсы. Ул инде әлеге уҡыу йортонда үҙенең 4-се быуын сығарылыусыларын әҙерләй. Үҙенең ижад тәжрибәһе, йылдар дауамында тупланған оҫталыҡ серҙәре менән ихлас уртаҡлаша ул уҡыусылары менән. Ул ижадсы, рәссам ғына түгел - уҡыусыларҙың яратҡан остазы, аң-белеме менән уртаҡлашыусы, дөрөҫ йүнәлеш биреүсе тәрбиәсеһе, кәрәк саҡта ярҙам ҡулын һуҙыр дуҫы ла. Кешелекле, кеселекле булғаны өсөн уны уҡыусылары хөрмәт итә, уҡыу йортон тамамлап сығып киткәс тә бәйләнештәрен өҙмәй. Рәзидә Фирғәт ҡызының башланғысы менән уҡыусылар өсөн Урал аръяғы районлары буйлап күсмә пленарҙар ойоштороло. Ҡайҙа ғына булмай улар - хозур тәбиғәтле Бөрйән ерендә лә, Йылайырҙың матур төбәктәрендә лә. Нәҡ ошондай аҫыл тәбиғәтле ерҙәрҙә тәьҫирләнгән йәш ижадсылар ҡулынан иҫ китмәле полотнолар - шаҡ ҡатҡыс эштәр тыуа ла инде!

Рәзидә ханымдың ижадында пейзаж айырыуса мөһим, үҙәк урынды биләй. Уның әҫәрҙәрендә беҙҙең гүзәл тәбиғәтебеҙ үҙенең бар төҫтәрендә, тулылығында, камиллығында һәм йәнлелегендә сағыла. Үтә күренмәле һәм мәңге ҡайҙалыр ашыҡҡан тау йылғаһы, еребеҙҙе ҡалҡан ише тәрәп торған мәғрур тауҙар, уйсан ҡаялар, һаумал һөттәй аҡ томан, башҡорттоң айырылмаҫ дуҫы һәм донъя йөгөн тартҡанда алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы булған аттар, мәңгелектең үҙенә таш һәйкәл булып баҫҡан тауҙар теҙмәһе, башҡорт донъяһын шәмдәй уралтҡан мәңге йәшел ҡарағайҙар, талғын ғына йырын йырлап аҡҡан шишмә моңон тыңлап, әкрен генә елгә бәүелгән талдар, мең-мең төҫө менән йәйге болондо сыбарлаған йәнгә яҡын ялан сәскәләре, тыуған еребеҙҙе йәшел бәрхәттәй япҡан күгүлән, сихри зәңгәрлеге менән арбар тынсыҡ күк - бәхет өсөн, донъяға ризалыҡ күҙе менән бағыр өсөн ошо ғына ла етә бит, тип өндәшкәндәй, күңелдәрҙә киләсәккә өмөт уятҡандай.

Рәзидә Фирғәт ҡыҙы пейзажсы булараҡ танылһа ла, ундағы төҫтәрҙе күреү, улар менән тылсымлы идара итә белеү һәләте уны башҡа жанрҙарҙа ла ысын ҡылҡәләм оҫтаһы яһай. Уның эштәре араһында бер нисә портрет та бар. Үҙенең әсәһе, педагогик хеҙмәт ветераны Хәтимә Солтанморат ҡыҙы Моратованың (Нурдәүләтова), Башҡортостандың һәм Марий-Эл республикаларының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Муса Нурдәүләтовтың портреттарын ҡараған кешеләр Рәзидәнең уларҙы сынъяһау итеп һынландырыуын, буяуҙар аша хатта характерҙарын һынландыра, холоҡ-фиғел сағылыштарын бирә алыуын билдәләй.

Ижадсы үҙе әйтмешләй, иң уҫал, ғәҙел һәм талапсан тәнҡитселәр - уның яҡындары. Женя исемле ейәнсәре ижади процесҡа шулай уҡ ҡушылып китә, әммә иң беренсе һәм ғәҙел тәнҡитсе - ире һәм коллегаһы Червон Насретдин улы. Ошо ижади тандем - был инде мәңге бергә булған ныҡлы ғаилә лә. Улар өс балаға ғүмер һәм матур тәрбиә биреп, оло тормош юлына сығарғандар: Айгизәләре - иҡтисадсы, Айназа - юрист, Алмаз - архитектура өлкәһенә һайлаған киләсәккә белгес.

Үҙенә яҙмыш тарафынан тәғәйенләгән бөтә статустары араһында иң мөһиме тип Рәзидә ханым өләсәйлеген атай. Ижадынан айырылмаҫ ҡылҡәләм оҫтаһы ғаиләһендә - уңған хужабикә, иренә - тоғро ҡатын, балаларына - хәстәрлекле әсәй, ейәндәренә - яратҡан өләсәй.

Терегөмөш шикелле тиктормаҫ заттан ул - күп сәйәхәт итә, әүҙем тормош алып бара, спорт менән дә дуҫ. Ҡул эштәре менән булышыуы - үҙе бер тема, үҙе бер ижад. Алтын ҡуллы оҫтабикә сынъяһау итеп һаҡлалдар, селтәрҙәр эшләп ҡуя - иҫең китерлек! Ул башҡорт халҡының рухи мираҫына шундай һаҡсыл ҡараша - боронғолоҡто һаҡлау, ҡәҙерләү, таратыу яҡлы. Тыумыштан бирелмеш һәләте менән ул һәр нәмәгә зауыҡ менән ҡарай, халҡыбыҙҙың боронғо күсәгилешлек традицияларын һаҡлап, тергеҙеп, ысын ижадҡа йәштәрҙе йәләп итә. Декоратив-ҡулланма сәнғәт өлкәһендә унан кәңәш һорағандар, уның һүҙенә ҡолаҡ һалғандар бихисап. Тәбиғи һәләте менән ул һәр нәмәлә матурлыҡ күрергә, зауыҡ табырға өйрәнгән, белгәнен йәштәргә генә түгел, инде танылған оҫтабикәләргә лә өйрәтеп, остаз ролен дә үтәй.

Кеше матур эше менән, ти халыҡ. Тормошҡа яратып баҡҡан, тәбиғәттәге һәр ниҙән зауыҡ эҙләгән, үҙенең солғанышы менән тулы гармонияла йәшәгән, күңел байлыҡтарын ҡылҡәләм ярҙамында асыҡ, сағыу, йәнде имләр, күңелдә дауалар сүрәттә бирә алған ысын ижадсы ул Рәзидә Фирғәт ҡыҙы. Иң бөйөк һәм ҡабатланмаҫ Ижадсы - Аллаһ уның күңеленә ижад орлоҡтарын һалған, ана шул орлоҡтар рәссам йөрәгендә шытып сығып, һабаҡ еткереп, сәскәгә тумалып беҙҙең күҙ алдына ысын картина - йөрәк емеше булып килеп баҫа ла инде.

Ваҡытты туҡтатып булмай, тинек. Ана шул мәңге хәрәкәттәге ваҡыт ғали йәнәптәренең илаһи мәлдәрен күңел күҙенә элеп, йөрәге аша үткәреп, беҙҙең алға баҫтыра алған Тылсымсылар инде рәссамдар. Мәл туҡтатҡан арауыҡтары - тере картина, рәссамдың йөрәк аһтары һеңгән арауыҡ... Ошо тылсымсылар рәтендә үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙы - Рәзидә Хисаметдинованың булыуы - халҡыбыҙға мәртәбә.

**Альбина ӨМӨТБАЕВА.**
**Йылайыр районы.**

---

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# ӨС КӨНЛӨК, ӨС ТИНЛЕК ДОНЪЯЛА...




**Валентина Матвиенко Бәхет министрлыгын барлыҡҡа килтереүҙе тәҡдим итмәксе. Ай-һай, шаярталыр ул. Шулай ҙа ундай министрлык төҙөлә ҡалһа, нимә менән шөғөлләнер ине икән? Мөгайын, ил граждандарын бәхетле итеү мәсьәләләрен хәл итер ине. Тик бәхетле булыуҙың күрһәткестәре нимәлә һуң? Кемдәр үҙҙәрен бәхетле итеп тоя алыр ине илебеҙҙә: байҙармы, ярлыларммы? Граждандар эш урыны эҙләп, ғаиләләрен ҡалдырып, Себерҙәрҙә, сит илдәрҙә йөрөһә, бәхетлеме һуң? Сөнки... Мәсьәләгә өс юҫыктан ҡарайыҡ:**

**А** Сөнки "Бәхетле булыуың мөһим түгел, үҙеңде бәхетле итеп тойоуың мөһим" тиҙәр. Кемдәр донъяға тыуған, улар барыһы ла бәхетле. Сөнки ғүмер яралған мәлдә миллионлаған ихтимал ғүмер араһынан Хоҙай Тәғәлә һине һайлап алып тыуҙырған икән, һин иң бәхетле. Ә инде ҡалған 999999 ғүмергә бындай бәхет йылмаймағас, Хоҙайҙың мөхәббәтенә һин лайыҡ булғас, тыуыуың үҙе бәхет! Бының өсөн доғалар уҡып, зекер әйтеп, Хоҙайҙы маҡтап тороу лазым!

**Б** Сөнки әҙәм балаһы, үҙенең донъяға тыуыуы менән бәхетле икәнлеген аңламайынса, ғүмере буйына бәхетен эҙләй. Хатта ки комфортлы йәшәү шартын булдырғандан һуң да уға һәр ваҡыт ниҙер етмәй, күберәккә өлгәшкәндән һуң йәнә лә күберәкте там итеп, булғаны менән шөкөр итә белмәйенсә ҡаңғыра...

**В** Сөнки ул бәхеттең һаулыҡ, күңел тынысылығы икәнлеген аңламай. Фәҡәт баҡыйлыҡҡа күскәс кенә эҙләгәнен табалыр, һәр хәлдә, аңлайҙыр әҙәм балаһы. Сөнки уның иң бәхетле мәле әсәһенең ҡарынында ятҡан сағында була. Тап шуның өсөн дә сабый тыуған саҡта шул бәхетен юғалтыу ҡайғыһынан ҡысҡырып илай башлай. Бәлки, шуға күрәлер ҙә бәхеттең нимә икәнлеген аңламайынса, ғүмере буйы эҙләнәлер.

Бәхет министрлығы, бәлки, кешеләргә өс көнлөк, өс тинлек донъяла үҙенең бәхетле икәнлеген аңлатыу менән шөғөлләнергә тейештер...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАҪҠЫС ТА ТАБИП

■ Тәүге һыуыҡтар башланғас та аяҡ-ҡул һындырыу ҡурҡынысы ла арта. Иртән туң ерҙә тайып йығылыуҙан ауыр йәрәхәттәр алыу ихтималы ла бар. "Подиатрҙар лигаһы" медицина үҙәктәре һәм табиптар ассоциацияһы етәксеһе Ольга Чижевская белдереүенсә, быны сәбәптәре төрлөсә. Беренсеһе, һауа шарттары - тайғаҡ юл, тротуарҙар, ҡар яуыуы, көслө ел. Шулай уҡ был миҙгелдә күптәр спорт менән әүҙем шөғөлләнә. Саңғы, сноубордтан ҡолап та йәрәхәтләнергә мөмкин. Тағы бер сәбәп - аяҡ кейеме. Ул аяҡтарға йылы ла, шул уҡ ваҡытта үксәне дөрөҫ тоторға тейеш, шул саҡта ҡолаған саҡта ла йәрәхәт булмаясаҡ. Уғги кеүек аяҡ кейеме ҡурҡыныс иҫәпләнә, сөнки ул аяҡ мускулдарының көсһөҙләнеүенә килтерә.

■ Испанияла йөрәк сирлеләр ҡатнашлығында яңы һынауҙар үткән. Йөрәктең ишемик ауырыуы тигән диагноз ҡуйылған 165 пациент физик әүҙемлек ваҡытында тын ҡыҫылыуына, күкрәк тирәһендәге ауыртыуҙарға зарланған. Башта улар тренажерҙа үҙенең организмының физик торошон баһалаған. Ғалимдар еңелсә физик күнекмә ярҙамында уларҙың йөрәктәренең торошон тикшергән. Ял итеп алғандан һуң, уларға 60 баҫҡысты атлап күтәрелергә тәҡдим иткәндәр. Мәғлүмәттәрҙе анализлағандан һуң, шундай һығымта яһалған: 4-се ҡатҡа йәйәүләп 40-45 секунд эсендә күтәрелә алаһығыҙ икән, йөрәк сире булыуға ҡарамаҫтан, һеҙҙең хәлегеҙ яҡшы һәм әлегә бер ниндәй ҡурҡыныс та янамай. "Баҫҡыс тесты" йөрәк сәләмәтлеген тикшереп ҡарау өсөн иң еңел, ябай ысул, ти тикшереүсе авторҙары.

■ Кешенең психик торошо һәм үҙен нисек тойоуы төнөн нисек йоҡлауына бәйле. Күпме йоҡлау түгел, нисек йоҡлау мөһимерәк икән. Ә быға тиклем йоҡоға бәйле бөтөн кәңәштәр уның нисә сәғәт булырға тейешлегенә генә ҡайтып ҡала ине. 8 сәғәттән кәм йоҡлағандар ҙа, 12 сәғәттән күберәк йоҡлағандар ҙа депрессия менән яфалана. Теүәл 8 сәғәт йоҡлағандар үҙҙәрен бик яҡшы тойған, ә психик яҡтан иң сәләмәт тип 9,7 сәғәт йоҡлағандар танылған. Үҙенде яҡшы тойоу өсөн шулай уҡ физик яҡтан әүҙемлек тә кәрәк, ти белгестәр. Йәшелсә-емеште күберәк ашау ҙа сәләмәтлек өсөн файҙалы. Көнөнә 5-әр порция сей йәшелсә һәм еләк-емеш ашағандар үҙен яҡшыраҡ тойоуы асыҡланған. "Төндә ҡаты итеп йоҡлау, көндөҙ йүгереп йөрөү һәм сәләмәт туҡланыу - кешенең һау, яҡшы кәйефтә булыуының өс бағанаһы", ти ғалимдар.

■ Һалҡын яраҡкан кешеләр оҙағыраҡ йәшәй икәне билдәле. Ғалимдар был күренештең сәбәбен асыҡлаған. Бәҡтиһән, һыуыҡ күҙәнәктәр кимәлендә организмды зарарлы аҡһым берләшмәләренән таҙарта ала икән. Тап уларҙың күбәйеүе тәндә ҡартайта ла инде. Һынауҙар кешеләрҙә генә түгел, йәнлектәр араһында ла үткәрелгән. Асыҡланыуынса, һалҡын хайуандар донъяһында ла ғүмер оҙайлығына килтерә. Тимәк, йылы яратыу - сәләмәтлек өсөн зарарлы, шуға ла үҙегеҙҙе артыҡ йылыға өйрәтмәгеҙ, һалҡынса һауа температураһы кеше һәм барлыҡ тереклек өсөн күпкә ҡулайлыраҡ.

РУС ЯҘЫУСЫЛАРЫНАН

# МИНЕҢ ТОРМОШ ТӘЖРИБӘҺЕ

**Лев Николаевич Толстойҙың башҡорттар араһында булыуы тураһында беҙ яҡшы хәбәрҙарбыҙ. Был турала фотолар ҙа бәйән итә. Ә бына арҙаҡлы яҙыусының улы Лев Львовичтың да бер нисә тапҡыр башҡорт ерҙәрендә булып китеүен күптәр белмәй. Уның фекерҙәре беҙҙең өсөн шулай уҡ ҡиммәт. Лев Львович беҙҙең тәбиғәт менән һоҡлана, шифалы ҡымыҙҙан ауыҙ итә. Хатта башта уны бөтөн ауырыуҙарҙан дауа тип ҡабул иткәндәр, тигән уй ҙа килә башҡа. Һуңынан был ҡарашы үҙгәрә, әлбиттә. Ғөмүмән, Лев Львович тормошта үҙен эҙләгән һәм үҙен асып бөтә алмаған әҙәм балаһы булып күҙ алдына баҫа. Шулай ҙа хәтирәләре ул йәшәгән осорҙо, шул заман ауырлыҡтарын, идеалдарын аңларға ярҙам итә. Уның яҙмаларының беҙҙең өсөн әһәмиәтле урындарын тәҡдим итәбеҙ.**

Лев Львович Толстой Ясная Поляналағы туғандарына шулай тип яҙа: "Вячеславтарҙан, йәғни яңы Өфө-Златоуст тимер юлының Теләк станцияһынан яҙам. Был яҡтар шул тиклем матур. Кеше лә бик юҡ. Үтеп сыҡмаҫлыҡ һаҙлыҡтар, улар аша көньяҡҡа урман һуҙылған. Ҡайһы бер урындарҙа буш башҡорт ауылдары күренә. Һәм бөтә ер ҡош-ҡорт, йәнлек менән тулы. Болан, айыу, һеләүһен, аҡҡош, ҡыр ҡаҙҙары... Һунарсы йәрәге хатта бөтөнләй юғалып, аптырауҙа ҡала. Ағиҙел йылғаһында пароходта барғанда ла, мәсәлән, яр буйында ҡамыштар араһында аҡҡоштарҙың матур муйындары күренеп ҡала ине. Вячеслав болан, ҡорҙо һ.б. йыш осрата икән. Быларҙан тыш, шундай тынлыҡ һәм тыныслыҡ, ҡай саҡ ҡайҙа килеп эләктем икән, тигән сәйер уй ҙа килеп ҡуя башҡа. Дөйөм алғанда, мин ҡәнәғәтмен. Бары тик һеҙ иҫән-һау булығыҙ. Ҡыҙыҡ та, фәһемле лә, файҙалы ла нәмәләрҙе үҙем өмөт иткәндән дә күберәк күрҙем. Хуш булығыҙ. Бөтәгеҙҙе лә үбәм, һөйөклө гимнастарымды һәм хужаларымды, ҙурҙарын да, бәләкәстәрен дә. Яҙығыҙ: Өфө, Ҡазан урамы, Златоуст тимер юлының Өфө хәрәкәт контораһы. Берсҡа, минә тапшырырға"

*[1890 йылдың йәйендә Волга буйлап Нижнийҙан Ҡаҙанға төштөм, унан Кама үренән һәм Ағиҙелдән Өфөгә барҙым. Ул саҡта яңы тип һаналған Өфө-Златоуст тимер юлы менән Урал тауҙарына барып еттем].*

"Урал итәгендә һунар итеү иҫ киткес шәп булды. Мин мылтыҡ тотоп, болот-болот өйрәктәрҙе һауаға күтәреп, Теләк станцияһы эргә-тирәһендәге мөгжизәле урындарҙы көндәр буйы ҡыҙыра торғайным. Бер мәл алыҫҡараҡ китеп, умарталар торған аҡланға килеп сыҡтым. Ҡарт умартасы мине өйөнә индереп, гәрәбә төҫөндәге бер стакан бал балы эсерҙе. Ул минә илаһи бер эсемлек булып тойолдо".

Һамарға килгәс, Л.Л. Толстой әсәһенә яҙа: "Үҙенең ғаиләһе менән Һамарҙа йәшәгән Кузнецовтың өйөнән яҙам. Бибиков ҡымыҙсыларҙан тотош бер урҙа тота. Улар төрлө ҡатлам вәкилдәре: студенттар, руханиҙар, офицерҙар, гимназия мөғәллимдәре, гимназистар, курсисткалар, һәм башҡа төрлө "публика". Ашығып яҙыуымдың сәбәбе шунда, мине әле ямщик

ҺАБАҠТАР



# БАШҠАЛАРҒА НИ ТЕЛӘҺӘҢ...

## үҙеңә лә шул булыр

Офиска ингәндә лә, сыҡҡанда ла вахта янын утлы күртәнән үткән һымаҡ үтә Флорида. Бына нисәмә ай уны бер үк һорау борсой: "Ҡайҙан килеп ултырҙы ул был урынға?"

Быға тиклем һәүетемсә генә йәшәп, эшләп йөрөгән Флорида вахтала ултырған мөләйем ҡатын менән осрашмаҫ өсөн һуңғы ваҡытта хатта тәҙрәнән инергә лә әҙер бит. Ниндәй гәрлек, түбәнселек! Оҙаҡ йылдар ойошмала эшләгән бүлек мөдире ошо ябай вахтерҙан шулай ҡурҡһын әле. Етәксеһенән дә улай шөрләмәй бит ул, ә бына Зиләә, ябай хеҙмәткәр, ишек һаҡсыһы, уны көндән-көн нығыраҡ хәүефләндерә, борсолдора. Ни тиклем үҙен яҡшыға, ыңғайға көйләп ҡараһа ла, Зиләгә ҡарата мөнәсәбәтен бер нисек тә үҙгәртә алмай, уның бында эшләүе менән килешеп етмәй.

Вахтерҙы күрмәҫ өсөн көн һайын әллә ниндәй хәйлә, мутлыҡ уйлап сығарырға тура килә бит уға. Бына бөгөн ишектән ингәс тә, бер кем дә бөйләнештә булмаһа ла, телефоның ҡолағына терәне лә, ҡысҡырып көлгән булып, тауышына, йөҙөнә шат ҡиәфәт ғәләмәте сығарып үтеп китте. Ҡолағына Зиләнең "Һаумыһығыҙ!" тигән тауышы салынып ҡалды, әммә Флорида артына әйләнеп тә ҡараманы, һауалы ғына баҫып, нығ мәшғүл кешеләй, тыҡ-тыҡ үтеп китте.

Күрә алмауснлыҡ күҙҙе томалай, тигәндәре дөрөҫ икән, бөтә булмышын, вахтер булып, ишек алдында ултырһа ла, Зиләнең сикһеҙ бәхетле һәм үҙ-үҙенән, тормошонан ҡәнәғәт йөҙөн күрмәү теләге биләп алғанға күрә, ҡаршыһына осраған етәксеһен дә күрмәй ҡалды Флорида. Ә бөгөн бит тап уның күҙенә салыныраға, игтибарын йәлеп итергә, яуларға тейеш ине. Айырым осраҡтарҙа ғына кейгән костюмын кейеп, биҙәнеп-яһанып килеүе лә етәксегә инергә лә, Зиләне эштән бушатыуҙарын һорап, сираттағы этлеген һалыу ине уйы. Бөгөн инә алмаһа, иртәгә һуң буласаҡ, сөнки быға тиклем вахтала ултырған ҡатынға яңы вазифа тәҡдим итергә теләгәндәрен ҡолаҡ сите менән генә ишетеп ҡалғайны.

Артына боролоп, өндәшергә иткәйне, уныһы иһә күптән "Рәмилевна"нан һалдырып, Зилә менән бик йылы һәм яҡын итеп һөйләшеп тә тора. Боролоп, етәксеһенә бер аҙ ымһынып ҡарап торҙо ла, үҙенең эш бүлмәһенә икенсе ҡатҡа күтәрелде.

Ауыҙың ҡыйыш булғанға көҙгөгә үпкәләмә, тиҙәр, әммә Флорида бөгөн дә көҙгөләге сағылышынан үҙе тертләп, бер ғәйепһеҙ быяланы саҡ алып бырағтырманы. Һуңғы осорҙа уға һәр ваҡыт көҙгөнән күҙҙәре зәһәр йылтыраған, ауыҙ-мороно асыулы бүлтәйгән ҡатын ҡарай. Йәш-елкенсәк булмаһа ла, әле булһа гүзәл затты иң беренсе асыу һәм көнләшеү тойғоһо йәмһеҙләй, тигәнде аңлап етмәй шул ул. Өҫтәүенә, бөгөн етәксеһенә матурыраҡ, сағыуыраҡ күренәм тип, керпегенә һылаған тушы, ағып төшөп, күҙе тирәһен әҙәм ҡарағыһыҙ итеп буяған. Әлдә Зиләгә әйләнеп ҡарамаған да, әлдә генә етәксеһе күрмәгән.

Өтчет мәле булһа ла, ҡулына эш бармай бик оҙаҡ ултырҙы Флорида. Ни эшләтергә был Зиләне? Ул бында эшләгәндә Флоридаға тынғылыҡ булмаясаҡ бит. Уны нисек эшенән китергә мәжбүр итергә? Ошо уй һуңғы ваҡытта тотош тормошон биләп алғайны. Эштә генә түгел, хатта өйөндә лә шул хаҡта ғына уйлай, тиһәң дә хата булмаҫ, моғайын. Аҫтыртын ғына башҡа урындан эш эҙләп тә маташты бит хатта. Изгелек итеүҙән түгел, әлбиттә, унан ҡотолоу ниәтенән. Вахтерға ҡарағанда яҡшыраҡ та эш урыны тәҡдим итһәйне, әммә Зилә ризалашманы. Үҙ асыуына, нәфрәтенә тонсоғоп, төшкә тиклем бер ниндәй эш ырата алмай ултырҙы Флорида.

Тынысланғасыраҡ инермен, тип, етәксеһенә инеүҙе лә төштән һуңға кисектереп торҙо. Әммә боронғолар юҡҡа ғына "Иртә уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ" тип әйтмәгән икән - был көндә ниәтен бөтөнләй боймоға ашыра алманы. Төштән һуң ҡулына төрлө папка тотоп, ихлас йылмайып, Зилә үҙе килеп инде. Эшкә мөкиббән бирелеп ултырған булып, мониторҙан күҙ алмай ғына тыңланы уны Флорида. Ваҡытлыса эштәр идарасыһы итеп ҡуйған икән бөгөн етәксе Зиләне. Быныһы инде бүлек мөдирен, ысын мәғәнәһендә, сығырынан сығарҙы. Бүлмәһенән сығып китеү менән ишеген эстән бикләне лә тәҙрә төбөнә килде.

Яратмай шул Зиләне Флорида. Был тойғо байтаҡ йылдар дауам итә инде. Икеүҙән-икеү булғанда Флоридаға ул тиклем ауыр түгел йәшлек дуҫы янында. Ҡасандыр иң тәрән хистәре, серҙәре менән тап уның менән серләшә ине бит. Ә бына эргәләрендә башҡа кеше булһа, Зиләгә ҡаныға, һөйләшеүе, тауышы, үҙен тотошо, бөтә ҡылыҡ-фиғеле бөтөнләй икенсегә үҙгәрә лә ҡуя. Ошо халәтенә ҡаршы бер нәмә лә эшләй алмай ул. Был - уның үҙенә күрә һаҡланыу инстинкты. Йәш сағында бәйнеҙ тормош алып барыу оятын, выждан ғазабын кисереүҙән һаҡланыу сараһы. Тик йәшлек дуҫы ғына



көтә. Ул бер нисә ҡымыҙ бешеүсене алып килгән дә хәҙер кире Богатоеҡа ҡайтырға ашыға. Мин һау-сәләмәт, бында тағы ла бер-ике аҙна булырмын тип уйлайым".

...Ырымбурға ат һатып алыр өсөн алыш-биреш итеү баҙарына йыйыныуыбыҙ батша вариҫының был яҡтарҙа йөрөгән сағына тура килде. Бына вариҫты көткән ауылға килеп еттек. Сиркәү эргәһендә йыйылған халыҡ араһында торам. Алыҫта ҡара саң болото күтәрелде, унан инде тиргә батып сапҡан ат баштары һәм дуғалары күренде. Бер нисә ҡыңғыраулы тройка ауылға килеп инде һәм йәтеш кенә итеп сиркәү эргәһенә килеп туҡтаны. Батша вариҫы үҙенең коляскаһынан һикереп төштө. Сиркәү папертыһы эргәһенән үтеп барышлай минең алтын төймәле студент мундирыма аптырап ҡарап алды һәм тиҙ генә сиркәүгә инеп китте. Сергей Ухтомский менән күрешкән мәлемдә мин уға вариҫ менән танышырға теләүебеҙҙе аңғарттым. Ләкин ул ҡырҡа ҡаршы килде. Ул кеше күрер хәлдә түгел, ныҡ арыған, тине. Шул саҡта миндә батша улы Александровичты уратҡан кешеләр тураһында кире фекер барлыҡҡа килде...

Шул уҡ кис беҙ Ырымбурға табан ҡуҙғалып киттек. Буласаҡ батша ла унда барырға тейеш. Беҙ ҡунаҡханала туҡталдыҡ һәм көнөбөҙҙө ҡаланың мөһабәт мәсете менән танышыуҙан башланыҡ. Был мәсет менән бигерәк тә беҙҙең юлдашыбыҙ башҡорт Нәғим ҡыҙыҡһынды. Сережа уны ат белгесе булараҡ үҙе менән алғайны. Мәсеттән сыҡҡас, майҙанда ултырған ниндәйҙер сәйер кешеләргә иғтибар иттек, улар беҙҙе күҙәтәләр ине. Беҙ буш ширлекҡә барып ял итергә ултырҙыҡ. Бөхтә, таҙа кейенгән теге сәйер әҙәмдәрҙең береһе беҙҙең эргәгә килде, Сергейҙан иплəп кенә Ырымбурға нимәгә килгәнебеҙҙе белеште. "Бомба ырғытырға", - көлөргә аша яман итеп ҡарап Сергей шулай тип ыжғырҙы. Был һүҙҙәр теге әҙәмгә шул тиклем ныҡ тәьҫир итте, эргәлә ҡапыл ҡына бомба шартланмыны ни! Майҙанда ығы-зығы ҡупты, кешеләр ҡаса башланылар. Ә беҙ кире ҡунаҡханаға ҡайтып киттек. Унда иһә подъезда һәм баҫҡыстар буйлап полицейскийҙар теҙелгән һәм беҙҙең номер мисәт һүғып бикләнгән ине. Беҙҙән тиҙ генә ҡаланы ҡалдырып китеү тураһында ҡултамғалар талап иттеләр. Сережа ҡул ҡуйҙы, мин баш тарттым. Һәм беҙ ат һатып алырға ла өлгөрмәйенсә, станцияға табан юл алдыҡ.

Айырыуса мөһабәт, матур Нәғим был хәлгә ныҡ көйҙө. Алтын менән уҡаланған түбәтәйле башын һүҙһеҙ генә сайҡап: "Нисек шулай була инде?" - тип көрһөндө...

*[Бәләкәй Нәғимгә Л.Н. Толстой 1871 йылдың йәйендә ҡымыҙға килгән сағында иғтибар иткән була. - ПСС. Т. 83. С. 189. Хәҙер Нәғим Акиров Толстойҙарҙың һамарҙағы имениеһы эргәһендәрәк йәшәгән була. Ул ҡымыҙ бешә, ҡайһы бер эштәрҙә Толстойҙың балаларына ярҙам итә...]*

...1892 йылдың яҙында Л.Л. Толстой ҡымыҙ эсеп көс йыя һәм башҡаларҙы ла шуға өндәй. 1892 йылдың 30 апрелендә Патровканан С.А. Толстойға яҙған хатын ошолай тамамлай: "P.S. Таняны ҡымыҙ эсергә бында бик саҡырып ҡалам. Дала тулы ләлә, миләүшә сәскәләре - хушбуй аңҡый. Һәм бөтән төрлө йәшеллек, сафлыҡ, матурлыҡ..."

*ОР ГМТ. Архив С.А. Толстой, № 13913. Конверт эсендә Т. Л. Толстаяға айырым хат та һалған: "Таня, бында дауаланырға кил. Әле ҡымыҙҙың иң шифалы һәм тап уны эсә торған шәп мәл. Уйла ла, килеп ет. Тиф сире бөтән юҡ, һәм далала уны йоҡтороп та булмай".*

***Л.Л. Толстой. "Минең тормош тәжрибәһенән" хәтирәләренән.***

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА әҙерләне.**

---

бер нәмә лә булмаған кеүек тота үҙен. Исмаһам, бер тапҡыр ғына булһа ла, студент йылдарын иҫкә төшөрһәсе, Флоридаға, бәлки, еңелерәк тә булыр ине.

Ойошмала яңы кеше булһа ла, бөтәһе лә тиерлек вахта янында туҡтап, Зилә менән бер-ике ауыҙ һүҙ алышмай үтеп китмәй. Олоһо-кесеһе уның менән кәңәшләшә, шатлыҡ-ҡыуанысы менән уртаҡлаша. Йыйылыш йәки байрам сараһы булһа ла ошо шым вахтер - шуларҙың уртаһында. Шуның өсөн дә Флорида һуңғы ваҡытта корпоративтарға, хеҙмәттәштәренең тыуған көндәренә йөрөмәй ҙә башланы. Йәштән иғтибар үҙәгендә булырға, тупаҫ шаяртыуҙары менән бөтәһен дә үҙенә әүрәтеп ултырырға яратҡан, шунан ҙур кинәнес тапҡан Флорида тыныс тауышлы, әммә йор һүҙле Зиләгә диҡҡәт ҙурыраҡ икәнлеген тоя шул. Шуға ла үҙенә артыҡ һүҙ бирелмәгән, башҡаларҙың иғтибарын яулай алмай ҡайтҡан ҡунаҡтарҙан, байрамдарҙан һуң башҡаларҙы ғына түгел, үҙен дә күрә алмаҫ хәлгә килә. Бындай ваҡытта ул хатта ауырыуға һабыша. Ҙур булмаған коллективты төркөмдәргә, компанияларға бүлергә, айырымларға, хеҙмәттәштәрен бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға тырышыуы ла тап шул йәшлек дуҫының ойошмаға эшкә урынлашыуынан башланды, шикелле.

Үҙе менән аралашҡыһы килмәгәнде белмәйме, әллә белмәгәнгә һалышамы был Зилә? Әле лә бына күптән идарасы булып эшләгән кеүек бер папканы-ҡағыҙҙы бутамай, һәр береһенең рәтен-сиратын белеп, Флориданың мыҫҡыллы, түбәнһетеүле күҙ ҡарашына ла иғтибар итмәй, йомошон йомошлап сығып та китте. Үҙен шул тиклем тыныс тота, мөләйем йылмайыу, ипле, әҙәпле, кешелекле - бына ни өсөн яратмай икән уны Флорида. Бөтәһенә бер төрлө эскерһеҙ, ярҙамсыл, тормошонан ҡәнәғәт була алғаны өсөн.

Йәшлек дуҫын яратмағанының сәбәбе, әлбиттә, икенсегә икәнлеген аңлай Флорида. Түбәнге аңда ятҡан хәүеф, шик тойғоһо бер ҡасан да ташлағаны юҡ әле. Өнөндә булмаһа, төштәренә инеп аптырата бит ул йәшлек мажаралары. Уларҙы, үҙ гонаһтарын хатта Флорида бөгөн үҙе лә танырға ҡурҡа. Һаман булһа баҫлығып уяныуҙары ана шул ғазапланыуҙары, шикләнеүҙәре, хәүефләнеүҙәренә бәйле.

Йәшлек йылдары бергә үтте уларҙың. Зилә - күп балалы ғаиләлә иң ҙуры булғанға күрә, урта мәктәпте тамамлағас та, эшкә урынлашты, ә юғары уҡыу йортон ситтән тороп тамамланы. Ә Флорида - атай-әсәһенең берҙән-бер ҡыҙы, нисек этептөртөп уҡырға инһә, шулай уҡып сыҡты. Зилә сессияға барғанда иптәш ҡыҙының әхлаҡһыҙ тормош менән йәшәүен күрәбелә йөрөнө, үҙе әхирәтен әрләһә лә, уның күп ҡылығы менән килешмәһә лә, башҡалар янында уны һәр ваҡыт аҡланы, яҡланы, күтәрҙе.

Флорида бөгөн үҙенә күрә юғары ғына урын биләп, дәрәжәле урында ултыра. Шәхси тормошо ла үҙе теләгәнсә бара. Бығы тиклем Зиләнең ауыҙ асып кемдәлер яманлағанын, ғәйбәт, ләстит һөйләгәнен ишеткәне юҡ. Флориданың йәшлек хаталарын да әлек һөйләмәгәндә бөгөн кемгәләр һөйләр тип тә уйламай. Әммә шул тыныс һәм ипле кешенең уның тураһында бөтәһен дә белгәне өсөн күрә алмай. Бары шул ғына.

Аҫтыртын рәүештә уны эштән ебәртеү өсөн нимә генә эшләмәне ул. Үҙенең бөтә фантазияһын эшкә екте. Туранан-тура эшләргә, әлбиттә, ҡыйыулығы етмәне, сөнки Зиләнең Флоридан күпкә белемлерәк, фекерлерәк, эшлеклерәк икәнлеген коллективта бөтәһе лә белә. Уның тураһында ғәйбәт сығарып та маташты, нахаҡ һүҙ таратты. Тик алтынға нәжес яғылмаҫ! Уның хәсәтө хеҙмәттәштәренең бер ҡолағынан инһә, икенсеһенән сығып осто, исмаһам, береһен булһа ла ҡыҙыҡтырманы.

Зиләне эштән ҡыуҙырыу тураһында ҡара уйы барып сыҡмауын Флорида ауыр кисерҙе. Һәр ваҡыт кире уй, хәүеф, ҡурҡыу тойғоһо менән стресс хәлендә йөрөгәнгә тиҙҙән хатта ҡаты ауырып, оҙайлы ваҡыт дауаланырға ла тура килде. Әммә дауаханала ятҡанда әлеге шул Зиләнән башҡа бер кем дә хәлен килеп белмәне уның. Сираттағы тапҡыр килгәнендә йәшлек дуҫынан һорайһы итте:

- Зилә, һиңә ҡаршы эшләгән этлектәремде бөтәһен дә белеп йөрөнөң бит, ниңә бер ҡасан да өндәшмәнең? Үҙеңдең ҡулыңда ҡеүәтле ҡорал була тороп, ниңә шуны минә ҡаршы ҡулланманың?

- Һинең һорауыңа яуап ошо китапта булыр, - тип йәшлек дуҫына тормош матурлығы, яуызлыҡ һәм изгелек тураһында ҡалын ғына риүәйәттәр китабын ҡалдырҙы Зилә. Ул сығып киткәс тә Флорида китаптың уртаһынан асты һәм түбәндәге хикмәтле хикәйәгә юлыҡты: "Оло йәштәге хәрби сәнгәт оҫтаһы башҡа бер ҡасан да алышҡа сыҡмаҫҡа ҡарар итә һәм был хаҡта башҡаларға иғлан итә. Көндәрҙән бер көндө ғәйрәтле, һауалы йәш һуғышсы ҡартты, һынап ҡарамаҡ булып, майҙанға көс һынашырға саҡыра. Уның ныҡлы баш тартҡанын күргәс, теге ҡарттың үҙен, ғаиләһен, ырыуын кәмһетә башлай. Был икәүҙе күҙәткәндәр хәҙер ҡарт түҙмәй көрәшкә сығыр инде тип көтә. Әммә улар уйлағанса килеп сыҡмай. Һөҙөмтәлә йәш һуғышсы ары китә. Шуны ғына көткән оҫтаның уҡыусылары йүгереп килә лә:

- Һеҙгә атай-олатайығыҙҙың, үҙегеҙҙең, ғаиләгеҙҙең намыҫын һаҡлағығыҙ килмәнеме ни? Ул бит һеҙҙе шундай кәмһетте... - тип һорай. Оҫта һорауға һорау менән яуап бирә:

- Бүләк бирергә теләгән кешенең бүләген алмаһалар, ул кемдә ҡала?

- Һе, билдәле инде, бүләк итеүсенең үҙендә ҡала, - була яуап.

- Көнсөллөк, яуызлыҡ һәм күрә алмаусанлыҡ менән дә шулай уҡ. Әгәр ҙә беҙ уны ҡабул итмәйбеҙ икән, улар бирергә, уртаҡлашырға теләгәндәрҙең үҙендә ҡала. Теге егеттең мыҫҡылдарын, кәмһетеүҙәрен мин алманым, тимәк, уларҙың бөтәһе лә үҙендә ҡалды, - тип яуап биргән аҡыл эйәһе".

Флорида буштан-бушҡа бер ғәйепһеҙ Зиләгә эшләгән үҙенең этлектәре, яуызлыҡтары үҙенә сир булып ҡайтҡанын шунда ғына аңланы...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

**Күҙаллауға - эйе. Пландарға - юҡ!**

Проектты күҙаллау һәм план - икеһе ике төрлө нәмә. Әлбиттә, нимә алырға теләүегеҙҙе белеү яҡшы, һәм ул проектты һеҙ аныҡ күҙалларға тейеш. Нимәнелер һорау өсөн, ниндәйҙер аныҡ нәмәгә өлгәшеү, эйә булыу теләге көслө булырға тейеш.

Күпселек компаниялар эшмәкәрлектәренең күҙаллауға нигеҙләнгәне менән маҡтана. Әммә, "Илдең кардиология ҡорамалдары баҙарында лидер булырға", тигән һүҙбәйләнеш - ул проектты күҙаллау түгел, ул бары тик банкирҙарҙы, башҡаларҙы үҙенә ылыҡтырған һөйләм генә.

Проектты күҙаллау - теләгән маҡсатыңа хас ҡылыҡһырламаны ентекле уйлап эш итеү һөҙөмтәһе, ә бының өсөн эске күреүең ныҡ үҫешкән булырға тейеш.

Тормоштан нимәләр алырға теләгән барлыҡ осраҡтарҙа ла ғәмәл бер үк: теләгән проектығыҙҙы асыҡ һәм бар тулылығында күрергә кәрәк. Әммә проблема шунда: кешегә үҙенең теләгән аныҡ билдәләргә өйрәнеү зарур.

Тамамланған образды күреү менән, уны хәтерҙә ҡалдырырға һәм тейешле һөҙөмтәгә алып барып еткереү өсөн үҙенән-үҙе тормошҡа аша башлаған ваҡиғалар сылбыры артынан эйәреү мөһим. Әлбиттә, һеҙ ошо юлда нимә көткәнен, нимә кәрәк буласағын күҙаллай алаһығыҙ, ләкин ышаныслығыҙ ни тиклем көслө булһа, ҡаршылыҡтарға әҙерлек шул тиклем кәмерәк талап ителә.

Киләсәккә ҡағылған бөтә нәмәлә, предприятие ойоштороу булһынмы ул йәки тау башына менеүме - әҙерлек һәм планлаштырыу кимәле һәр ваҡыт һеҙҙең үҙ-үҙегеҙгә ышаныс кимәленә пропорциональ буласаҡ. Иң яҡшы ысул: теләгән нәмәгеҙҙең аныҡ образын күҙаллау һәм маҡсатығыҙға юлдың асылыуын көтөү.

**Өсөнсө дошман: саманан тыш һаҡланыу (перестраховка)**

Ҡурҡыу һәм хәүефһеҙлек, именлек тураһында хәстәрлек менән ҡулға-ҡул тотоноп саманан тыш һаҡланыу килә һәм улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Һеҙ ян-яҡлап һаҡланырға теләйһегеҙ, сөнки кемдер идеяғыҙҙы, килемегеҙҙе урлауы һәм, хатта, бизнесығыҙҙы тартып алыуы мөмкин. Был ҡурҡыу нигеҙһеҙ. Ентекләп тикшерә башлаһаң, был идея һеҙҙеке түгел. Башығыҙҙа ниндәйҙер уй тыуһа, һеҙ уны үҙегеҙ уйлап сығарҙым тип уйламайһығыҙ, шулаймы? Быға икенсе яҡтан ҡараһаҡ, һеҙ был донъяла йәшәгән барлыҡ йән эйәләренең һәм кешелек расаһының именлеген арттырыу өсөн кәрәк булған аралашсы, мәғлүмәт каналы, тарнспорт сараһы. Әгәр шуны аңлаһағыҙ, үҙегеҙҙе һаҡлау зарурлығы үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ. Тышҡы сығанаҡтан башығыҙға бер уй төшкән икән, уның артынан шул уҡ юл менән икенселәре лә киләсәк. Әгәр һәр идеяны, унан бар тормошоғоҙ бәйле булған кеүек ҡабул итһәгеҙ, намыҫһыҙ һатыусылар ҡармағына эләгеп, бар аҡсағыҙҙы патенттарға, адвокаттарға һәм килешеүҙәргә түҙҙырасаҡһығыҙ. Шулай итеп, һеҙ бары тик бик ҡимməткә төшкән, кәштәлә саңға батып ятҡан ҡағыҙ кисәгенә генә эйә буласаҡһығыҙ.

Иң үкенеслеһе - идеяғыҙҙың бер ваҡытта ла һөҙөмтә бирмәүе һәм йөмғиәт тормошон яҡшыртмауы түгел, ә бер сәбәпһеҙ тиҫтәләрсә тапҡыр ауыр финанс хәлендә ҡалыуығыҙ буласаҡ.

**Пьер МОРАНСИ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА ТАУҘАР КӨНӨ

**Был иҫтәлекле дата Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы ҡарары менән 2023 йылдан билдәләнә. Тауҙар ҡоро ерҙең дүрттән бер өлөшөн тиерлек алып тора, донъя халҡының 15 проценты төбәк итә уларҙы.**

Тауҙар - бик күп үҙенсәлекле үҫемлек һәм хайуандар тереклек иткән урын, Ерҙең иң төп йылғалары тауҙарҙан башланғыс ала. Әммә экологик проблемалар, кешенең зыянлы эшмәкәрлеге тауҙарға ла тәьҫир итә: ҡарҙар һәм боҙлоҡтар ирей, тау-таш емерелеп төшә, ҡоролоҡ һәм янғындар урындағы тереклеккә зыян килтерә. Бына ошоларға киң йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында БМО йыл һайын 11 декабрь көнөндә уҙғарылған Тауҙар көнөнөң темаһын билдәләй. Мәҫәлән, башлап 2004 йылда "Тыныслыҡ: таулы райондарҙың тотороҡло үҫеш аҫҡысы" тигән темаға мәғлүмәттәр туплана, ә 2021 йылда "Тотороҡло таулы туризм", 2022 йылда "Ҡатын-ҡыҙҙар тау аҡтара" булһа, быйыл - "Тау экосистемаларын тергеҙеү" тигән мәсьәлә күтәрелә.

Рәсәйҙең 43 субъектында тауҙар һәм ҡалҡыулыҡтар бар һәм илдең яртыһынан күберәк өлөшөн биләп тора. Иң бейектәре - Кавказ тауҙары, бында Рәсәйҙең иң бейек түбәһе - Эльбрус урынлашҡан (диңгеҙ кимәленән 5642 метр). Төньяҡ Боҙло океан ярҙарынан Урал йылғаһына һәм Ҡаҙағстандың төньяҡ-көнбайышына тиклем 2000 километрҙан ашыуға һуҙылған Урал тауҙары ла бар Рәсәйҙә. Боронғо яҙмаларҙа уны Рифей, йәки Гиперборей тауҙары тип тә телгә алалар. Урыҫтарҙың боронғо яҙмаларында Билбау, Ҙур таш, Ер билбауы тигән атамалары һаҡланған. Урал тауҙарының атамаһы башҡорт теленән үҙләштерелгән топоним. Был төбәктәрҙә йәшәгән башҡа ерле халыҡтарҙа ул икенсе төрлө атала: комиҙар - Из, мансиҙар - Нёр, ханттар - Кев, ненецтар - Нгарка Пэ тип йөрөтә.

Башҡортостандың һәм Көньяҡ Уралдың иң бейек нөктәһе - Ямантау. Уның бейеклеге 1640 метр. Ләкин Көньяҡ Урал ҡурсаулығына индерелгән һәм туристар өсөн ябыҡ. Ә бына унан саҡ ҡына ҡалышып, 1582 метр бейеклектә булған Ирәмәл тауына теләгән кеше менә ала.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**46-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Аҡһым. Самонов. Панин. Ем. Варлов. Бесән. Әжәл. Ил. Огр. Йәшел. Кузьмин. Герц. Ежов. Нард. Сомали. Оро. Ишкәк. Озон. Көй. Реле. Изге. Көрт.

**Вертикаль буйынса:** Башкиров. Пустозеров. Науменко. Сари. Зоркин. Ниәт. Ҡамыш. Динар. Әсе. Ерек. Мелош. Карл. Маори. Егор. Василевский. Гамак. Ливо. Выприцкий.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 декабрь "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+
**7 декабрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**8 декабрь "Һиңһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**9 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**10 декабрь "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 декабрь Премьера! "Күктә ике йондоҙом балҡығанда"** (И. Лоҡманов), музыкаль мелодрама, моноспектакль. 16+
**9 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 декабрь "Йыр көсө"** эстрада концерты. 6+
**9 декабрь "В ожидании чуда"** этнотерапия. 11.00 0+
**10 декабрь "САДко"** төркөмө концерты. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 декабрь "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+
**5 декабрь Премьера! "Ярлыҡау"** (М. Кәрим), баллада. 13.00, 19.00 12+
**9 декабрь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. Пушкин), әкиәт. 13.000+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5 декабрь "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+
**6 декабрь "Фронтовичка"** (А. Батурина), драма. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 декабрь** БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Лира Фәйзуллинаның** юбилейлы ижад кисәһе. 6+
**8 декабрь "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**9 декабрь "Әсәй, бына һиңә килен...дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+
**10 декабрь "Приключения с огнем"** (Н. Шор), әкиәт. 12.00 0+
**"Караул! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАЛЫБЫҘ - ЙЫҺАНДА!



**Ошо көндәрҙә үткән "Рәсәй" халыҡ-ара күргәҙмә-форумында башҡорт балын Башҡортостан стендынан алып, йыһан станцияһына ебәрҙеләр.**

Тантаналы сара "Башҡортостан аграрный" төбәктең ауыл хужалығы аҙналығы сиктәрендә уҙҙы. Ул 2 декабргә тиклем эшләне. Сифатлы бал менән тәьмин итеү тураһында килешеүҙе космонавтар өсөн махсус ризыҡтар етештереүсе Бирюлевск аҙыҡ-түлек концентраттары экспериментальный заводы һәм "Башҡорт балы" компанияһы төҙөнө. Заводҡа барлығы 40 килограмм бал тапшырылды.

СӘХНӘЛӘ...

# ЗАМАНЫБЫҘ ЯБАЙ ТҮГЕЛ...

**Дөрөҫлөк яҡлы булыу - көнүҙәк бөгөн. Был сәнғәттә лә сағылыш таба хәҙер. Ошо көндәрҙә М. Горький исемендәге Ырымбур дәүләт төбәк драма театрының баш ҡалабыҙ халҡына тәҡдим иткән спектакле тап шундайҙарҙан булды. "Z осоро" ("Время Z") спектаклен М. Ғафури исемендәге БАДТ-тың Бәләкәй залында ҡуйҙылар.**



Был спектакль Рәсәй яҙыусылар союзының Ырымбур төбәк бүлексәһе рәйесе, шағир Виталий Молчанов әҫәренә нигеҙләнеп ижад ителгән. Әҫәрҙең үҙәгендә - бына инде нисәмә йылдар аяҙ күк йөҙөн күрмәгән Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары, Украина халҡы. Шағир үҙ күҙҙәре менән күргән, үҙ ҡолаҡтары менән ишеткән дөрөҫлөктө һөйләй. "Бер кеше башҡа телдә һөйләшкәне, башҡа милләттән булғаны өсөн икенсеһенең уны рәнйетергә, ҡыйырһытырға хаҡы бармы?" - тигән һорау, бына һигеҙ тиҫтә йылға яҡын арауыҡ үткәс, яңынан кешелек алдына килеп баҫа. Ә ни өсөн был һорау әленән-әле кире ҡалҡып, кешелекте ҡот осҡос ҡорбандарға этәрә тора һуң? Был турала ла шағир фекер төйөнөн һүтә, "Бер ҡасан да ҡабатланмаһын" тигән ваҡиғаларҙың беҙҙең заманда ла ысынбарлыҡ булыуын күрһәтә. "Был проектыбыҙ Президенттың мәҙәни башланғыстар фонды ярҙамын алды, шуға уны илебеҙҙең төрлө ҡалалары буйлап күрһәтәсәкбеҙ. Ырымбур тамашасыһына 21 июндә тәҡдим иткәйнек, яңыраҡ Һамарҙа булды, бына әле Өфөлә, артабан Силәбе, Екатеринбург, Магнитогорск ҡалаларына юлланабыҙ. Берәһен дә битараф ҡалдырмаҫ ауыр хәл-ваҡиғаларға арналған был шағир йөрәгендә тыуған әҫәр. Спектаклдә 20-гә яҡын артист ҡатнаша, һөйләүсе ролендә Максим Меденюк. Бындай сәхнә әҫәрҙәре ҡуйылырға һәм күрһәтелергә тейеш, сөнки бөгөн илебеҙҙең, тимәк, беҙҙең яҙмыштар шундағы яу ҡырында хәл ителә", - ти М. Горький исемендәге Ырымбур дәүләт төбәк драма театрының художество етәксеһе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Рифҡәт Исрафилов.

Шағирҙың "Донецк" поэмаһынан өҙөктәр, махсус хәрби операцияға һәм Украинала барған ваҡиғаларға арналған шиғри шәлкемдәре яңғыраны сәхнәлә. Уларға моң-һағышлы йырҙар, актерҙарҙың бейеүҙәре, хәрәкәттәре үрелеп барҙы. Яу ҡырына юлланған ирҙәрен ебәрмәҫкә ынтылған ҡатындар, батыр ул-ҡыҙҙарының ҡара хаттарын алған әсәләрҙең һыҡтауы, бер ғәйепһеҙ балаларҙың гүмере өҙөлөүенә шаһиттарҙың әсе күҙ йәштәре, туғанына ҡаршы ҡорал күтәрергә мәжбүрҙәрҙең трагедияһы - барыһы ла сағылыш тапты. "Спектакль донъяға ҡарашымды ҡырҡа үҙгәртмәһә лә, һәр кем үҙ иленең патриоты булырға, Ватаны ҡайҙа булыуын онотмаҫҡа тейеш, тигән хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр хәтергә төшөрҙө. Бындай сәхнә әҫәрҙәре мотлаҡ ҡуйылырға тейеш һәм унда илебеҙҙең киләсәге булған йәштәрҙә күберәк йөрөп интерга кәрәк. Һәр кем үҙенсә нығымта яһар, кемгәләр файҙаһы тейер", - тип фекерҙәре менән уртаҡлашты М. Аҡмулла исемендәге БДПУ колледжының 1-се курс студенты Әмир Ғималетдинов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Урыҫ халҡының "Моя хата с краю" тигәне һәр кемдең булмышына һеңеп, күрше-күләнде күрмәҫкә, урамдағын ишетмәҫкә, бейек ҡоймалар артына йәшеренеп йәшәргә күнеккән замандың аҫтын-өҫкә әйләндерер ваҡиғаларға шаһитбыҙ бөгөн. Уларҙың яҡшымы, дөрөҫмө, әллә юҡмы икәнен бынан бер нисә тиҫтә йыл үткәс, баһаларҙар. Шулай ҙа Ер йөҙөндәге тынислыҡ, ғәмһеҙ бала саҡ хаҡына битарафлыҡтан арынған, "Z осоро"н кисергән быуын беҙ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АФАРИН!

# ЙӘНҺҮРӘТЕБЕҘ ТАНЫЛЫУ ЯУЛАЙ



**Минскиҙа "Лістапад" халыҡ-ара кино фестивале тамамланды. Был ваҡиға бик күп илдәрҙең кинематографистарын берләштерә. "Лістападзік" программаһына 36 илдең 15 анимация фильмы һайлап алынған.**

"Лістападзік" конкурс программаһы балалар һәм анимация фильмдары өсөн бүленгән. Быйыл Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы унда "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтен (режиссеры Руслан Тәүәбилев) күрһәтте. Йәнһүрәт жюриҙың махсус призына лайыҡ булды, тип хәбәр иттеләр Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Төньяҡ амурҙары" - Башҡортостандың федераль прокат алған беренсе тулы метражлы йәнһүрәте. Был эш Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ярҙамы менән бойомға ашырылды. Батыр башҡорт яугирҙары тураһында йәнһүрәт геройҙары Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, опера йондоҙо Аҫҡар Абдразаҡов, йырсылар Айҙар Ғәлимов, Радик Юльяҡшин (Elvin Grey), Нәзифә Ҡадирова, Via Chappa төркөмө лидеры Илья Тавлияров, спорт комментаторы Азамат Моратовтың тауышы менән һөйләй.

"Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, 29 ғинуарҙа Мәскәүҙең Кино йортонда тулы метражлы анимация фильмы күрһәтелде. Май айында картинаны Өфө тамашасылары ла ҡарай алды. "Башинформ" Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың республикала йәшәүселәрҙе "Төньяҡ амурҙары"н ҡарарға саҡырыуы тураһында хәбәр иткәйне.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҠАТРАН ҺЫУЫҒЫ ЕТТЕ

**Тел өйрәнеүҙең төп ҡағиҙәһе - һүҙҙәрҙе яҙып та, уҡып та, тыңлап та иҫтә ҡалдырыу, ҡабатлау, әүҙем ҡулланыу. Башҡорт теле хазинаһындағы һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөп, телмәребеҙҙе байытайыҡ, үҫтерәйек.**

**Ҡасауыр.** "Ҡасауыр" тигәндә, үҙ юлын, үҙ һүҙен тотоусан кеше күҙҙә тотола. Ҡасауыр зат. Ҡуйған маҡсатҡа ҡасауырҙар ирешеүсән.

**Ҡатарҙаш.** Ҡайһы бер һөйләштә был һүҙ "йәштәш, тиҫтер" мәғәнәһендә йөрөй. Ҡатарҙаш балалар. Ҡатарҙаштар менән уҡырға инеү.

**Ҡатмар.** Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең итәгенә үҙ ишенән уратып һалған тар буйҙы, мәскәүҙе белдергән һүҙ. Ҡатмарлы күлдәк. Ҡатмарлап тегеү.

**Ҡатран.** Декабрь айын борон замандағыса ҡатран тип әйтеү телебеҙгә яҡыныраҡ. Ҡатран һыуығы. Ҡатранда ҡар мул яуҙы.

**Ҡатырма.** Майһыҙ табала бешерелгән йәймә шулай атала. Ҡатырмаға ҡамыр баҫыу. Балалар ҡатырма ярата.

**Ҡафиә.** Шиғыр юлы аҙағындағы һүҙ ауаздашлығын белдергән һүҙ, рифма була ҡафиә. Хатты ҡафиәләп яҙыу. Һүҙҙәрҙе ҡафиәгә тура килтереү.

**Фәймә МӘЖИТОВА әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДӨРӨҪЛӨК ИЗГЕЛЕККӘ КИЛТЕРӘ

Изгелек эшлә лә һыуға һал - балыҡ белер, балыҡ белмәһә - халыҡ белер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һине аңламаҫтар тип ҡурҡма, башҡаларҙы аңламауҙан ҡурҡ.

**(Боронғо аҡыл эйәһе).**

Кешеләр үҙ аҡылындағы бушлыҡты йыш ҡына асыу менән тултыра.

**(У. Олджер).**

Асыҡ ишеккә лә туҡылдатып ин, бәлки, уны һинең өсөн асмағандарҙыр.

**(Доминик Опольский).**

Намыҫтың иң яҡшы үҙенсәлеге шунда: ул һәр ваҡыт һинең яҡлы. Һинә яҡшы саҡта ул һине бер ваҡытта ла борсомай.

**(Роберт Орбен).**

Хәйерселәр байҙарҙан түгел, үҙҙәренән күберәк хәйер эләктергән хәйеселәрҙән көнләшә.

**(Бертран Рассел).**

Туй балдағы - сылбырҙың тәүге өлөшө.

**(Жарко Петан).**

Бөйөк кешеләр үҙ алдына маҡсат ҡуйып, ҡалғандар үҙ теләгенә эйәреп йәшәй.

**(У. Ирвинг).**

Донъяла нимәләр генә юҡ! Һәм күбеһе минә кәрәкмәй!

**(Сократ).**

Тәмәкене ташлауҙан да еңелерәге юҡ. Мин утыҙ тапҡыр ташланым инде.

**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ярлы ғаиләлә үҫкән Йәлил тигән малай бер ваҡыт ручкаһын юғалтҡан. Өйөнә ҡайтып барышлай юл ситенә ултырып, ҡайғыға батып, иламһырап ултыра икән был. Шул мәл уның эргәһенән матур кейенгән бер кеше үтеп бара һәм малайҙы күреп, туҡтап ҡала ла, ни өсөн илағанын белгәс, кеҫәһенән ручка сығара:**

**- Ошо ручканы юғалтҡайныңмы?**

**Йәлил, иламаҫҡа тырышып:**

**- Юҡ, минеке улай уҡ матур түгел ине, - тип яуап ҡайтара.**

**Малайҙың дөрөҫтө әйтеүе был кешегә бик тә оҡшап ҡала һәм ул:**

**- Улайһа, дөрөҫтө һөйләгәнең өсөн мин һиңә ошо ручканы бүләк итәм, зинһар, ҡабул ит, - ти.**

**Бәйғәмбәребеҙ хаҡлыҡты яратҡан, дөрөҫөн һөйләгән кешеләр өсөн бүләге тураһында шулай тигән бит: "Дөрөҫлөк изгелеккә килтерә, ә изгелек кешене ожмахҡа илтә".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23047

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1688